ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

15 йыл

9-15 декабрь (аҡъюлай) 2017

№49 (779)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡартаҙартҡыс трактор килә -**

машинаңды алып тор!



4-5

**Алтынсы интеграл һәм...**

ҡурай, ҡымыҙ, башҡорт теле тураһында



8-9

**Милли кейемебеҙ төрлө-төрлө -**

уны барлап, теүәлләп алаһыбыҙ бар



11

**Киләсәкте ҡайғыртҡандарҙы...**

Ufa-forum осраштырҙы



15-16

**ТВ-программа** 14

***Кешенең бәхете һәм бәхетһеҙлеге ул эйә булған ҡиммәтле әйберҙәр һәм алтындар һанынан ғибәрәт түгел. Шатлығы ла, ғазабы ла уның күңелендә. Аҡыл эйәһе теләһә ҡайһы илдә лә үҙен үҙ өйөндәгеләй хис итә. Киң күңелле кеше өсөн Бөтә ғаләм - уның йорто.***

***(Демокрит).***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Хоҡуҡтарығыҙ боҙолоу осраҡтарына тарығанығыҙ бармы? Һеҙ унан ниндәй һабаҡтар алдығыҙ?*

***Рәхимйән ЛАТИПОВ, ваҡытлыса эшһеҙ:*** Беҙҙең илдә хоҡуҡтары боҙолмаған кеше бар микән? Айырыуса бөгөнгө заманда. Ниндәй генә өлкәне алып ҡарама - бөтәһендә лә ябай кеше мәнфәғәте зыян күрә. Беҙҙең төп хоҡуҡтарыбыҙ илдең төп законы - РФ Конституцияһында билдәләнгән. Уның статьялары буйлап төшөп кит - һәр береһенең тупаҫ боҙолоу факттары буйынса меңәрләгән миҫалдар килтерергә мөмкин. Ә ундай мәғлүмәттәр тормошобоҙҙа аҙым һайын осрап ҡына тора. Улар хаҡында шулай уҡ киң мәғлүмәт сараларында ла гел хәбәр ителә. Дөйөм һүҙ буҡҡаһы булмаһын өсөн шулай ҙа үҙем һәм таныштарым менән булған ана шундай бер нисә ғибрәтле хәл тураһында телгә алып китәйем, улайһа. Конституциябыҙҙың 37-се статьяһында аҡҡа ҡара менән: "Һәр кемдең хеҙмәткә хоҡуғы бар", - тип яҙылып ҡуйған. Мин күп йылдар баш ҡалабыҙ заводтарының береһендә эшләнем. Производство алдынғыһы иҫәпләндем. Был хаҡта раҫлаған бик күп рәхмәт хаттары, почетлы билдәләр һәм иҫтәлекле бүләктәр ҙә бар архивымда. Пенсияға сығырға туғыҙ йыл ҡалғас, завод бөлгөнлөккә төштө һәм эш урынында күпләп ҡыҫҡартыуҙар башланды. Бында инде ҡарап тороусы булманы: квалификацияң юғарымы, грамоталарың бармы, ғаиләһе ҙурмы - иҫкә алыусы ла юҡ - бөтәһе бер "ҡайсы" аҫтына эләкте. Эшкә урынлаша алмай, осраҡлы шөғөл менән тапҡан аҡсаға ғаилә аҫрауы ауырға төшә башланы: ҡатын да пенсияға сыҡты. Балаларҙы уҡытыу өсөн вузға түләргә кәрәк, коммуналь хеҙмәттәргә түләү ҙә арта ғына бара. Үҙегеҙгә мәғлүм: пенсия йәшендәгеләрҙе бер ергә лә эшкә алмайҙар. Өҫтәүенә, вуз тамамлаған улым да һөнәре буйынса эш таба алмай, ситкә сығып китергә мәжбүр булды. Ҡайҙа һуң әлеге Төп китапта әйтелгән төп хоҡуҡ? Эшһеҙлек менән бер кемде лә аптыратып булмай инде бөгөн, ул беҙҙең тормош нормаһына әүерелде бит күптән. Ләкин бындай "сәйәсәт" дөрөҫ түгел, дәүләт ил иҡтисадын туҡтауһыҙ үҫтерә барырға, халҡын эш урындары менән тәьмин итергә тейеш. Ә инде был бурыс ил етәкселеге ҡулынан килмәй икән, хеҙмәткә хоҡуҡ хаҡындағы статья нишләп бар? Эшһеҙлеккә һылтанып, бот күтәреп өйҙә ятырға өйрәнде бит, юғиһә, тотош бер "синыф" - эшһеҙҙәр класы. Әйткәндәй, төп хоҡуғымды юллап, власть коридорҙарын да тапарға тура килде миңә. Шул саҡ күҙҙәрен дә, йөрәген дә май бөргән чиновниктарҙан, "йөрөмә ҡаңғыртып, үҙ эшеңде асып ебәр", тигән "аҡыллы" кәңәштәр ҙә ишетергә тура килде. Ә бына үҙ эшеңде асыу өсөн беҙҙә бөтөн ҡаршылыҡтар ҙа тыуҙырылған: шуны белеп әйттеме теге чиновник, әллә мыҫҡыллауы булдымы мине - аңламаным.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН*

# ШҮЛГӘНТАШ...

## серҙәрен асыуҙы дауам итә

**Ноябрҙә Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһендә палеолит рәсемдәрен реставрациялау буйынса халыҡ-ара экспедиция, йәғни алдынғы Европа реставраторы, ҡая һүрәттәрен һаҡлау өлкәһе белгесе Эдуаль Гийаме етәкселегендә Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге һәм "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы белгестәре - реставраторҙар эшләне.**



Боронғо кешеләрҙең ҡаяға төшөргән рәсемдәре һәм башҡа һынлы сәнғәт төрҙәре Европа биләмәһенә яҡынса 40 мең йыл элек үтеп ингән боронғо ата-бабаларҙың эҙҙәре, тип иҫәпләнгән. Әммә бөгөн палеонтологтар һәм антропологтар һынлы сәнғәт күпкә иртәрәк, кәмендә 100 мең йыл элек барлыҡҡа килгән, тигән фекерҙә. Рәсәйҙә иң билдәле боронғо һүрәт өлгөләре Шүлгәнташ мәмерйәһендә урынлашҡан. Күҙаллауҙар буйынса, улар мәмерйә диуарҙарына яҡынса 36 мең йыл элек төшөрөлгән. Һүрәттәрҙең күбеһе кальцит аҫтында ҡала, бер өлөшөнә юҡҡа сығыу хәүефе янай. Хәҙер Рәсәй һәм сит ил ғалимдары уларҙы өйрәнә һәм юҡҡа сығыуҙан һаҡлап ҡалыу алымдарын эҙләй.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

✓ *Киләсәктә илдә өлөшсөләр проблемаһын килтереп тыуҙырған бындай законһыҙлыҡҡа юл ҡуйылмаһын ине, сөнки был кеше хоҡуҡтарын боҙоу менән бер рәттән - ҙур енәйәт тә ул.*



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Ноябрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:



Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынан Рита Шәйҙуллина - **"Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**;

Йылайыр районы Матрай ауылынан Кәримә Жиляева, Белорет районы Рысҡай ауылынан Хәлимә Әфләтунова - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**;

Баймаҡ районы Ишей ауылынан Ғафар Кәримов, Шаран районы Ташлы ауылынан Венера Фәхретдинова - **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"**;

Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Рауил Ғәлин, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Уйылдан Шәрипов - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан"**;

Баймаҡ районы Оло Басай ауылынан Р. Сафина, Учалы районы Рысай ауылынан Дилбәр Ғәлина - **Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре"**;

Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылынан Г. Сәғәҙиева - **Әнисә Таһированың "Киске шәфәҡ йыры"**;

Баймаҡ районы Үрге Иҙрис ауылынан Садиҡ Ишмурзин - **Әлфиә Әсәҙуллинаның "Хыял осошо"**;

Баймаҡ районы 1-се Этҡол ауылынан Йомағужа Ғәзизов - **Йәүҙәт Бәшировтың "Башҡорт хан"**;

Ишембай районы Уразбай ауылынан Вәли Камалов - **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың "Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр"**;

Учалы районы Муса ауылынан Сәлиха Фәхретдинова, Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Г. Исламова, Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Вилүрә Харрасова, Ғүмәр ауылынан З. Үҙәнбаева, Әбйәлил районы Дәүләт ауылынан С. Йәнбирҙина, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Ғәйшә Шәһивәлиева, Мәләүез районы Сарлаҡ ауылынан Мәҙинә Фазлыәхмәтова, Өфө ҡалаһы Нагаево ҡасабаһынан Н. Аҡколов, Күмертау ҡалаһынан М. Кәлимуллина - **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ булды.

**Иҫкәрмә:** бүләкләнеүселәр китаптарҙы балалары, туғандары, таныштары аша алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

● Декабрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн **50665 индекслы "Киске Өфө"гә 554 һум 82 тингә** яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер ошондай уҡ китаптарға эйә буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● **Беҙҙең сайт:** www.kiskeufa.ru

● **Беҙҙең электрон почта:** kiskeufa@mail.ru

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Хоҡуҡтарығыҙ боҙолоу осраҡтарына тарығанығыҙ бармы? Һеҙ унан ниндәй һабаҡтар алдығыҙ?*



**(Башы 1-се биттә).**

***Рәшиҙә АЙЫТБАЕВА, эшләп йөрөүсе пенсионер, хеҙмәт ветераны:*** Хаҡлы ялға сыҡҡаныма етенсе йыл китте, тик һаман да эшләп йөрөйөм әле, шөкөр. Яңғыҙым өс баланы аяҡҡа баҫтырҙым, аталары 50 йәшендә вафат булып ҡуйҙы. Өлкән улым менән берҙән-бер ҡыҙым юғары белем алдылар, эшләп йөрөйҙәр, икеһе лә ғаиләле булып киттеләр, иншалла, ейән-ейәнсәрҙәрем бар. Хәҙер бөтөн маҡсатым - кинйә улыма уҡып сығырға ярҙамлашып, башлы-күҙле итеү. Бакалаврҙы бюджет нигеҙендә тамамлаһа ла, ул һайлаған специальность буйынса магистратура тигәне түләүле булып сыҡты. Шуға күрә үҙе лә ваҡытлыса булһа ла эшкә урынлашты - магистратурала ваҡыт яғы иркенерәк - шуныһы ҡулай. Үҙенең эш хаҡы үҙенән артмаһа ла, миңә еңелгәрәк тура килә. Минең пенсиям - 13 мең, айлыҡ эш хаҡым да шул саманан артмай. Ә уҡыуға йылына 70 мең түләргә кәрәк. Икегә бүлеп түләмәһәм, еткерә лә алмаҫ инем. Тик барыбер һәр тинендә һанап йәшәргә тура килә. Эшләп йөрөгәндәрҙең дә пенсиялары индексациялана башлаясаҡ, имеш, тигән хәбәр сыға биреп ҡуйғас, көтөп йөрөй инем, әле килеп бына гәзиттә бөтөнләй киреһен яҙып сыҡтылар. "Депутаттар эшләп йөрөгәндәрҙең пенсияларын индексациялау тураһындағы закон проектын кире ҡаҡты" ("Комсомольская правда", 28.11.2017) тип әйтелә унда. Сәбәбе шул ғына - бюджетта аҡса юҡ. Ә минеңсә, айына ярты миллион эш хаҡы алып ултырыусы депутаттарҙың ояты юҡ. Шул уҡ мәҡәлә авторы Е. Беляков маладис журналист икән, артабан ул сағыштырыу өсөн бик ҡыҙыҡлы таблица килтерә. Ярай, индексация өсөн дәүләттең 100 миллиард аҡсаһы юҡ икән, ти. Уның ҡарауы, чиновниктарҙы аҫрауға ғына йылына 1,3 триллион (!), эшкинмәгән, алдаҡсы банктар сығымын ҡаплауға - 2,7 триллион, АҠШ-тың дәүләт облигацияларына һалыуға 6 триллион дәүләт аҡсаһы йыл һайын табылып ҡына тора, хатта артығы менән, ә пенсионерҙың законлы ихтыяжы өсөн аҡса юҡ. Был индексация тураһындағы законды ғына түгел (үҙҙәренә кәрәккәндә закон боҙоу бер ни тормай шул), шул уҡ ваҡытта үҙе өсөн генә түгел, ил мәнфәғәтен дә күреп эшләп йөрөгән 15 миллион пенсионерҙың хоҡуҡтарын да тупаҫ боҙоу ул. Депутаттарҙың һәм, һәр ваҡыттағыса, "Аҡса юҡ, ләкин һеҙ бирешмәгеҙ", тигән лаҡабы буйынса эшләүен дауам иткән хөкүмәттең бындай ҡарары менән риза булмаусылар мин генә түгелдер, тип уйлайым. Һабаҡ тигәне шул: ғүмер буйы ятаҡкан эшемдә тырышып, илемә хеҙмәт иттем, ә хәҙер ул ил беҙҙе төп башына ултыртып, алдауҙан бушамай - ҡыҙғаныс... Балаларым, ғөмүмән, йәш быуын өсөн борсолам: улар бындай шарттарҙа нисек йәшәр?

***Әлмира СӘЙЕТОВА, өйһеҙ, алданған өлөшсө:*** Торлаҡҡа хоҡуҡ кешенең иң мөһим ихтыяждарының береһе. Бигерәк тә ғаиләле булһаң, торлаҡһыҙ бик ауырға тура килә. Ике балабыҙ бар. Кешелә лә, ятаҡта ла йәшәп ҡараныҡ, әле йәшәгән еребеҙ ҙә ваҡытлыса торлаҡ. Унан да көн дә килеп ҡыуып китәләр. Дәүләттән фатир ала алмағас, туйға төшкән һәм атаәсәйҙәр биргән бер аҙ аҡсаны ҡырып-һепереп тигәндәй, Әсәлек капиталына ҡушып, торлаҡ һатып алыу өсөн өлөшсө төҙөлөш фондына һалғайныҡ. Ләкин беҙҙе төп башына ултырттылар. Төҙөлөп ятҡан йортобоҙ, Яуаплылығы сикләнгән төҙөлөш ойошмаһының банкротлыҡҡа төшөүе сәбәпле, туҡталып ҡалды. Фатир ҙа юҡ, аҡса ла. Башҡа өлөшсөләр менән бергәләп ҡайҙарға ғына барманыҡ та, кемдәргә генә мөрәжәғәт итмәнек! Пикеттарға ла сыҡтыҡ, митингылар ойошторҙоҡ, аслыҡ иғлан итеүселәр ҙә бар хатта. Өлөшсөләр тауышын, ниһайәт, юғарыла ишеттеләр ҙә, буғай. Республика Башлығы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тырышлығы менән өлөшсөләр мәнфәғәтен хәстәрләргә тейешле закон да ҡабул ителде, тик уның вәкәләттәре бик сикләнгән. Башҡортостанда беҙҙеке һымаҡ 29 проблемалы йорт бар, әлеге закон буйынса бары тик 9 йорттоң ғына өлөшсөләре торлаҡлы булыуы ихтимал, тип яҙалар. Ләкин был ыңғай тәжрибә артабан дауам ителһә, кем белә, беҙгә лә бер ваҡыт сират етер. Киләсәктә илдә өлөшсөләр проблемаһын килтереп тыуҙырған бындай законһыҙлыҡҡа юл ҡуйылмаһын ине, сөнки был кеше хоҡуҡтарын боҙоу менән бер рәттән - ҙур енәйәт тә ул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Владимир Путин 2018 йылда Рәсәй Президентын һайлауҙа ҡатнашыуы хаҡында иғлан итте. Уның вәкәләт ваҡыты 2018 йылдың 7 мартында тамамлана. 2018 йылда Путин президентлыҡҡа дәғүәсе сифатында һайлау алды кампанияһында дүртенсегә ҡатнаша. Һайлауҙа еңгән осраҡта дәүләт башлығы вазифаһын 2018 йылдан 2024 йылға тиклем тағы алты йыл биләйәсәк. Рәсәйҙең дәүләт башлығы итеп ул беренсе тапҡыр 2000 йылда 4 йылға һайланғайны.

✓Мәскәүҙә Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев һәм Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың эшлекле осрашыуы үтте. Яҡтар республиканың социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләрен тикшерҙе. Атап әйткәндә, һүҙ транспорт системаһын үҫтереү, шул иҫәптән Өфөнән Көнсығыш сығыу юлы хаҡында барҙы.

✓"Берҙәм Рәсәй"ҙең XVII съезына Башҡортостандан 18 делегат бара. Делегацияны республика Башлығы, "Берҙәм Рәсәй"ҙең Юғары Советы ағзаһы Рөстәм Хәмитов етәкләйәсәк. Съезда ҡатнашыусылар араһында Өфө, Салауат, Белорет, Мәсетле, Ғафури, Бишбүләк, Балтас, Йылайыр, Илеш, Дәүләкән, Бәләбәй, Борай һәм башҡа райондарҙың вәкилдәре бар. "Берҙәм Рәсәй"ҙең XVII съезы 22-23 декабрҙә уҙа. Унда партияның 2018 йылға өҫтөнлөклө бурыстары билдәләнә һәм кадрҙар үҙгәреше көтөлә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетына республика һәм уның баш ҡалаһы буйлап балалар өсөн экскурсия турҙары әҙерләргә ҡушты. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, 2018 йылда Өфө буйлап балалар маршруты эшләй башлай, ул "Минең Рәсәй" балалар мәҙәни-танып белеү туризмы программаһына ингән.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикалағы дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, 2018 йылдың 1 ғинуарынан төбәктәге дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең (240 мең кеше) эш хаҡы дүрт процентҡа арта. Был мәғариф, фән, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау, халыҡты социаль хеҙмәтләндереү, спорт, йәштәр сәйәсәте, тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология, ауыл һәм урман хужалығы, ветеринария өлкәһендәге дәүләт һәм муниципаль учреждение хеҙмәткәрҙәренең бөтә категорияларына ҡағыла.

✔ *Буласаҡ сәнғәт әһелдәребеҙ, бәлки, танылған башҡорт йырсылары булып китергә тейешле йәш быуыныбыҙ, халыҡтың боронғо ижады менән таныш булмаһа, уны башҡара белмәһә, сәнғәт институтыбыҙ булыуҙан ни файҙа?*



*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# БАЛАҢ ГӘЗИТ УҠЫҺЫН...

**Гәзит-журналдарға яҙылыу барышында Мәхмүзә Әфтәх ҡыҙы Исламголованы почта бүлексәһендә, магазиндарҙа йыш осратырға була. Ул - ауылда бер кем тарафынан да һайлап ҡуйылмаған матбуғатҡа яҙылыу буйынса агитатор. Шулай ҙа Мәхмүзә апайҙың иң яратҡан гәзите - "Киске Өфө". Ошо гәзиткә ауылдаштарын яҙҙырыр өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙер. Ауылда хатта: "Мәхмүзә апай осраһа, "Киске Өфө"нө яҙҙыртмай ҡалмай инде ул", - тип көләләр. Был юлы Мәхмүзә Әфтәх ҡыҙы китапханаға "Атайсал" гәзите хәбәрселәре менән осрашыуға килгәйне. Уңайлы мәлдән файҙаланып, уның менән әңгәмә ҡороп өлгөрҙөм.**




➔ **Мәхмүзә Әфтәх ҡыҙы, һеҙ "Киске Өфө" гәзитен ҡасандан алдыраһығыҙ?**

-"Киске Өфө"нө сыға башлаған йылдан, бына 15 йыл инде бер һанын да ҡалдырмай алдырам. Шул ваҡыттан агитация ла алып барам. Иң тәүҙә ошо гәзиткә яҙылыу буйынса конкурс иғлан иткәстәре 47 дана "Киске Өфө" яҙҙырттым. Китапханала Исмәғилева Гөльямал эшләй ине, гәзитте халыҡ араһында таратыу буйынса икәүләп эшләнек.

➔ **Был гәзит нимәһе менән һеҙҙе шулай арбаны һуң?**

- Гәзиттең ҡайһы ғына рубрикаһын алһаң да, төплө фекере бар. Ундағы фекерҙәр өҫтәнмөҫтән, тел осондағы ғына фекер түгел, ә уйлауҙы, башты эшләтеүҙе талап итә. Бындағы мәҡәләләр бер мәғлүмәтте лә сәйнәп ҡаптырмай, уларҙы аңлар өсөн мейенең бөтә күҙәнәктәрен дә ҡыбырлатып, төбөнә төшөргә кәрәк. Шулай уҡ милләтебеҙҙең мәнфәғәтен ныҡ ҡайғырта был гәзит. Быны сәбәбен гәзиттең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙының тәжрибәһендә күрәм. Ул гәзиткә "Башҡортостан ҡыҙы" журналында, "Башҡортостан" гәзитендә эшләп, өлгөрөп еткән журналист булараҡ килде һәм "Киске Өфө"нө шулай уҡымлы, дәрәжәле республика баҫмаһы кимәленә күтәрә алды.

➔ **Ҡайһы бер йәштәр гәзит-журналдар уҡырға тырышмай хәҙер, шундайҙарға ни тип әйтер инегеҙ?**

- Башҡортса гәзит-журналдар нәшер итеү бигерәк тә телде, милләтте йәшәтеү, үҫтереү өсөн кәрәк. Бына шуны кесе йәштән аңлатыу, баланы кесе йәштән уҡырға өйрәтеү мөһим. Бала сағта ҡулына әҙерәк алдаштырып, ҡыҙыҡтырып китап тоттороһаң, уҡытһаң, аҙаҡ яйлап өйрәнеп китәләр улар. "Бынау мәҡәлә тураһында нимә уйлайһың?"- тип һорап, иғтибарын йәлеп итергә мөмкин баланың. Йә булмаһа: "Бынау мәҡәләне яҡтыла уҡып өлгөрмәгәйнем, йүнләп күрмәйем, уҡып ишеттерһәңсе", - тигән булып ебәрһәң, балалар ҡыуанып үтәйҙәр бит инде һинең теләгенде. Нисек кенә булмаһын, иң тәүҙә атай-әсәй балала китапҡа, гәзиткә һөйөү уятырға бурыслы.

➔ **Һеҙ тағы ла ниндәй гәзит-журналдар алдыраһығыҙ?**

- Пенсия аҡсаһына ғына йәшәһәм дә, матбуғатҡа аҡса йәлләмәйем. "Киске Өфө", "Һаҡмар" гәзиттәре, "Ағиҙел" журналы, руссаларҙан "Пенсионер", "Народный доктор", "Магия для тебя" тигән баҫмаларҙы алдырам. Мин электән ауылдаштарым араһында башҡорт баҫмаларын таратыу өсөн көрәштем. Бер мәлдә, аҡса юҡлыҡтан, "Йәшлек" гәзите ябылырға мөмкин икән, тигән хәбәр ишеткәс, ауыл халҡынан аҡсалата ярҙам йыйҙым. Ул ваҡытта, йәғни 1992 йылда, 5 һум ҙур аҡса ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡтың күбеһе 5-әр һум аҡса бирҙе, һирәкләп 10-ар һум биргәндәр ҙә булды. Шулай итеп, Ярат халҡы - 493 һум, Йәрмөхәмәттәр - 155 һум, Ғүмәр ауылы халҡы 176 һум аҡса йыйып тапшырҙыҡ. Йәрмөхәмәттән Баязитова Гөлнур менән Ишҡыуатов Зөфәр, Ғүмәрҙән Иҫәндәүләтова Маһикамал аҡса йыйырға ярҙам итте. Ошо аҡса биргән кешеләрҙең исемлеген ҡултамғалары менән һалып ҡуйғанмын. "Замандаш", "Атайсал" гәзиттәренә лә ярҙам иттек. Ауылдаштарыма мине аңлағандары, һүҙемде йыҡмағандары өсөн шул тиклем нык рәхмәтлемен.

➔ **Гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

-"Киске Өфө"нө алдырһындар, уҡыһындар, таратһындар. Уҡыу ғына етмәй, уйланһындар, фекерләһендәр. "Киске Өфө" тап уйландыра, фекерләргә өйрәтә торған баҫма. Халҡыбыҙ тарихына арналған материалдар бик күп баҫыла унда. Йәһүдтәр, тарихын белмәгән халыҡ сабый бала менән бер, тип әйтә бит. Тимәк, тарихын, үткәнен, телен белмәгән кешене үҙең теләгәнсә бөгөргә, әүәләргә, теләгән яҡҡа ауҙарырға була. Бына шуныһы ҡурҡыныс. Заман һынауҙары алдында бөгөлмәҫ өсөн дә "Киске Өфө"нө уҡыу кәрәк.

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА**
**әңгәмәләште.**
**Баймаҡ районы**
**Ярат ауылы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ХАЛҠЫҢ МЕНӘН ҒОРУРЛАН!

***Әлмирә ҠЫУАТОВА, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, режиссер:*** Бөгөн беҙҙә халҡыбыҙҙың киләсәгенә бәйле ниндәй генә мәсьәләләр борсоуға һалһа ла, баррикадалар ҡормай, ҡан ҡоймай хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк. Ғөмүмән, проблемалар һөйләшеү, аңлашыу менән юҡҡа сыға. Һәр кем үҙ урынында, үҙ тапҡырындағы бурысты атҡара икән, оло проблемалар булмаясаҡ та. Ниндәй өлкәлә эшләүгә ҡарамаҫтан, ни бары ҡул ҡаушырып тик ултырмаҫҡа, һәр ваҡыт алға барырға, үҫешергә кәрәк. Мөһим һәм етди эштәрҙән тыш, күптәр уйын-көлкө, кәйеф-сафа ҡороу тип кенә ҡабул иткән заманса флешмобтар ойоштороу, концерт ҡуйыу, йәки интернет селтәрендә ниндәйҙер мәғлүмәт таратыу кеүек эшмәкәрлек тә урынлы булыуы бар.

Әлеге көндә хаҡлы ялда булһам да, Өфө сәнғәт училищеһы һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусылары менән йыш аралашып торам. Ике йылдан Башҡортостанда Бөтә донъя Фольклориадаһы үтәсәк. Был оло байрамда башҡорт халҡының мәҙәниәтен, сәнғәтен, тарихын тулыһынса сағылдырыу, ҡунаҡтаҙы юғары кимәлдәге әҙерлек менән ҡаршылағы килә. Шуға, вокал уҡытыусыларынан ҡыҙыҡһынып, башҡорт халҡының боронғо йырҙарын, мөнәжәт, сеңләү, һыҡтау кеүек ауыҙ-тел ижадын өйрәнәһегеҙме, тип һорайым. "Юҡ, беҙ классик әҫәрҙәрҙе генә өйрәнәбеҙ, шулай ҡушалар", - тигән яуап ишетәм. Буласаҡ сәнғәт әһелдәребеҙ, бәлки, танылған башҡорт йырсылары булып китергә тейешле йәш быуыныбыҙ, халыҡтың боронғо ауыҙ-тел ижады менән таныш булмаһа, уны башҡара белмәһә, үҙебеҙҙең сәнғәт институтыбыҙ булыуҙан ни файҙа? Зарланғандан телгә алмайым был турала, ни бары һәр кем тәғәйен урында тейешле эште башҡарһын ине, тигән теләктән генә әйтәм. Беҙҙең бөгөнгө хәл артыҡ ауыр булмаһа ла, еңел дә түгел. Бөтәһе лә үҙебеҙҙең ҡулда ине, ләкин ваҡытында һәр ғаиләлә балаға башҡорт халҡының бөтә донъяға танылған батырҙары, Аҡ батша ла, унан алдағы хандар ҙа, унан һуңғы ил етәкселәре лә тик башҡорт халҡына ғына аҫабалыҡ биреүе, донъялағы биш иң моңло телдең береһе - башҡорт теле булыуы, күп милләт вәкилдәре маҡтана алмаған "Урал батыр" кеүек мәшһүр эпосыбыҙ барлығы тураһында һөйләп үҫтермәү арҡаһында ошо хәлдә ҡалғанбыҙ. Халҡың менән ғорурлана белеү, үҙеңде бүтәндәр араһында кәм итеп тоймау ҙа илһөйәрлектең бер сағылышы һәм ул киләсәктә баланың тыуған төйәген йөрәгендә йөрөтәсәгенә, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртасағына нигеҙ. Балаларыбыҙҙа милли үҙаң тәрбиәләйек, һәр нәмәлә алтын урталыҡ табырға өйрәтәйек, һөйләшеү-килешеүҙәр ярҙамында проблемаларҙы хәл итеү юлын күрһәтәйек һәм сит кеше хәлен түгел, үҙ халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртып йәшәргә өйрәтәйек.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостандың баш ҡалаһында Салауат Юлаев һәйкәле авторы, билдәле скульптор Сосланбәк Тавасиев исемендәге урамдың барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ҡала Советының конкурс комиссияһы ғаризаларҙы ҡарай башланы. Өфөләр урам, сквер, ҡала майҙандары исемдәренең 100-ҙән ашыу вариантын ебәргән. Бәйгегә 13 декабрҙә йомғаҡ яһала.

✔Яңы йыл күңел асыу саралары өсөн Башҡортостандың баш ҡалаһында ике төп майҙансыҡ әҙерләнә. Ул шыршылар - Ленин исемендәге майҙанда һәм Конгресс-холл алдындағы майҙанда. Ленин исемендәге майҙанда Благовещен районынан 30 метрлыҡ йәшел һылыуҡай ҡуйылған да инде. Яҡын көндәрҙә Яңы йылды байрам итеү атрибуты Конгресс-холл алдындағы майҙанда ла урын аласаҡ. Өфөлә күп фатирлы йорттар эргә-тирәһенә бөтәһе 64 яңы йыл шыршыһы һәм шул сама боҙ тауы ҡуйылыу күҙаллана.

✔Башҡортостан мәктәптәрендә ҡышҡы каникул 30 декабрҙә башлана һәм 14 ғинуарға тиклем дауам итә. Шулай итеп, эшләгән граждандар 2018 йылдың ҡыш айҙарында түбәндәгеsә ял итә: 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар - Яңы йыл каникулдары; 7 ғинуар - Христос Раштыуаһы. Февралдә - 23-өнән (Ватанды һаҡлаусылар көнө) 25-нә тиклем.

✔Башҡортостанстаттың аҙналыҡ мониторинг мәғлүмәттәре буйынса, А-76 маркалы бензин 0,6 процентҡа ҡиммәтләнеп, бер литры 34,50 һумға еткән. АИ-92 маркалы бензин хәҙер уртаса 36,36 һум, А-95 һәм артабанғылары 39,53 һум тора. Бер аҙнала ошо маркаларҙың һәр ҡайһыһы 0,4 процентҡа ҡыйбатланған. Башҡортостандың баш ҡалаһында дизель яғыулығы ла ҡиммәтләнгән. Бөгөн уның бер литры уртаса 39,64 һум тәшкил итә.

✔"Росстат" 2016 йылғы бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыуҙың яҡынса йомғаҡтарын иғлан итте. Уларға ярашлы, 2006 йыл менән сағыштырғанда илдә, шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙы һәм шәхси эшҡыуарҙарҙы иҫәпкә алмағанда, күпселек категориялар буйынса хужалыҡтар һаны аҙайған. Картуф, мал аҙығы культуралары, йәшелсә һәм баҡса культуралары сәсеү майҙандары кәмегән. Уҙған тиҫтә йылда барлыҡ категориялы хужалыҡтарҙа эре малдар һаны 18 процентҡа аҙайған.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Унда юлдарға һибелгән химик матдәләр аяҡ кейемен ашап, эшлектән сығара. Шуға, Өфөлә химия ҡулланырға тырышмайбыҙ, юҡһа, аяҡ кейемдәре тиҙ туҙыуҙа ла ҡала округы хакимиәтен сәбәп итеп ҡуйыуҙары бик мөмкин".*



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАР УЙЫНДАРЫНА ӘҘЕРБЕҘ!

✓ **Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡалаға 2019 йылда уҙасаҡ 53-сө Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарына әҙерлек барышы менән танышырға килгән Халыҡ-ара балалар уйындары комитеты етәксеһе Ричард Смит менән осрашты.** Көн дауамында Ричард Смит ярыштар үтәсәк объекттарҙа булды, ойоштороу мәсьәләләренә бәйле һорауҙар буйынса фекер алышты. Ҡалала Уйындарға әҙерлек эштәре башланған - ойоштороу комитеты төҙөлгән, ярыш майҙансыҡтары билдәләнгән."Әҙерлек буйынса бер ниндәй хәүеф юҡ. Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарын үткәргәндән алып ҡалала 29 ҙур һәм бәләкәй ҡунаҡхана төҙөлдө. Йәйге уйындарҙы ла сифатлы һәм яҡшы итеп, балалар күңелендә һаҡланырлыҡ итеп уҙғарырға ниәтләйбеҙ", - ти Ирек Ялалов. Өфө Халыҡ-ара балалар уйындарының ярты быуатлыҡ тарихында Ҡышҡы һәм Йәйге уйындарҙы уҙғарған берҙән-бер ҡала буласаҡ. Сараға донъяның төрлө илдәренән 1500 спортсы килеүе көтөлә.

✓ **Был аҙнала Өфөгә эш сәфәре менән Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич килде.** Ул йыл һайын 90 миллион ҡап дауалау саралары етештергән, быйыл күкрәк биҙенең яман шешенә ҡаршы һәм тромб булдырмаусы препараттар сығара башлаған "Фармстандарт-Уфавита" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең эшмәкәрлеге, уның производство майҙансыҡтары һәм лабораторияһы менән танышҡандан һуң, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән Волга буйы федераль округындағы Рәсәй Федерацияһы субъекттарының Закондар сығарыу (вәкәләтле) дәүләт власы органдары ассоциацияһы ултырышында ҡатнашты. Ултырышты асып, Михаил Бабич берлектәге эш барышында стратегик мәсьәләләрҙең хәл ителеүен, эшҡыуарҙарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса уполномоченныйҙар институты эшмәкәрлегенең ҡануниәт нигеҙҙәре булдырылыуын билдәләне. Михаил Бабич бөгөн Ассоциацияның һәм уның аппаратының эшендә өҫтөнлөклө йүнәлеш булып дәүләт идараһы системаһында коррупцияға ҡаршы көрәш мәсьәләләре тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ үткәнендә енәйәт яуаплылығына тарттырылған шәхестәрҙең - муниципаль вазифала, шартлы яза алыусыларҙың муниципаль хеҙмәттә булыуына юл ҡуймау өсөн законлы саралар ҡабул итергә кәрәклегенә иғтибар йүнәлтте. Бынан тыш сарала муниципаль хеҙмәттә булыусылар һәм урындағы хакимиәттәр башлыҡтарының килемдәре тураһында мәғлүмәт биреү мәсьәләһе лә, алда торған Президент һайлауҙары һәм һайлау барышы ваҡытында ҡануниәтте үтәү һәм тәртип һаҡлау тураһында ла һүҙ барҙы.

✓ Өфөлә социаль объекттар төҙөү һәм яңыртып ҡороу дауам итә. Әлеге ваҡытта Революцион урамы, 171 адресы буйынса урынлашҡан 44-се мәктәптә реконструкция эштәре бара. Реконструкция һәм уҡыу процесын бер рәттән алып барыу мөмкинлеге булмағанлыҡтан һәм уҡыусыларҙың, хеҙмәткәрҙәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итеп, 2018 йылдың 1 ғинуарынан 1-4-се синыф уҡыусылары - 41-се, 5-9 синыфтар - 100-сө, 10-11-се синыфтар 15-се мәктәптә уҡыуҙарын дауам итәсәк. Килешеү шарттары буйынса, үҙгәртеп ҡороу 2018 йыл һуңында тамамланырға тейеш. Төп корпуста эштәр һәм яңы корпустар төҙөү бер үк ваҡытта алып барылыуы ремонт эштәренең ваҡытын ҡыҫҡартасаҡ. Яңы проект буйынса, ремонттан һуң мәктәп ике тапҡырға күберәк баланы бер юлы ҡабул итеү ҡеүәтенә эйә буласаҡ, йәғни уҡытыу бер сменаға ҡалдырыласаҡ.

КӨНАУАЗ

# ҠАРТАҘАРТҠЫС ТРАКТОР КИЛӘ -

## машинаңды алып тор!

**Ниһайәт, көттөрөп, һағындырып ҡына ҡар яуып, инде ялҡыта башлаған туҙанды баҫтырып та ҡуйҙы. Шул уҡ ваҡытта йыл башында аномаль ҡар яуыуын хәтергә төшөрөп, бер аҙ хәүефләндерҙе лә. 2017/2018 ҡыш миҙгелен ҡаршыларға ҡала хеҙмәттәре әҙерме? Ошо һорауға асыҡлыҡ индереү маҡсатынан Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов киң мәғлүмәт саралары журналистарын матбуғат конференцияһына йыйҙы.**



Дөрөҫөн әйткәндә, был сара ҡәләм оҫталарына ликбез булды, сөнки ҡайһы берҙә хәбәрселәр аңын-тоңон уйламай, ниндәйҙер күренешкә анализ яһамай һәм нимә күрә, шуны үҙенсә интерпретациялап, тиҙерәк халыҡҡа еткеререгә ашыға. Был йәһәттән Салауат Сәхи улы тәү сиратта ҡала территорияһын тотоу, таҙартыу һәм хеҙмәтләндереү бүленеше менән таныштырҙы. Йәғни, Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ идаралығы ҡарамағына юлдар, ихаталар һәм йорттар, парктар, тыҡрыҡтар ҡарауын, ә ихаталар, йорттар үҙҙәре, ихаталарҙан сығыу юлдары - Өфө ҡалаһының Торлаҡ хужалығы идараһы ҡарамағында булыуын тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрҙө. Ошо бүленеште хәҙер тест рәүешендә эшләнгән интерактив карта аша ла асыҡларға мөмкин (http://ufacity.info/territory). Унда ҡала территорияһының муниципаль һәм шәхси предприятиелар араһында яуаплылыҡ зоналары бүленеше күрһәтелгән. Ул һәр кемде үҙ территорияһында ҡар таҙартыу эштәрен ваҡытында башҡарырға мәжбүр итәсәк, сөнки үҙ бурысын үтәмәгән өсөн вазифалы кешеләрҙән алып ойошмаларға тиклем административ яуаплылыҡ - штрафтар ҡаралған, ә инде граждандар өсөн йәмәғәт контроленең тағы бер элементы булып торасаҡ. Салауат Хөсәйенов килтергән һандарға күҙ һалһаҡ, ҡала ҡарамағында булған дөйөм майҙан яҡынса 20 миллион квадрат метр тәшкил итә, шуларҙың 17,7 миллионы - ҡаланың юл селтәре, 290,6 мең квадрат метры - тротуарҙар, 1,6 миллион квадрат метры - газондар, 64,4 мең квадрат метры - туҡталыштар. Урам-юл селтәренең дөйөм оҙонлоғо 1546 километр.

- Ҡышҡыһын ҡала биләмәһен ҡарҙан таҙартыу раҫланған регламентҡа ярашлы алып барыла, - тине Салауат Сәхи улы. - Төп билдәһе булып техниканың әҙерлеге тора. Быйылғы ҡышта урам-юл селтәрен таҙартыу өсөн 410 берәмек ҡар таҙартыу техникаһы бар. Улар Коммуналь хужалыҡ идаралығы ҡарамағында булған юлдарҙы, ҙур тыҡрыҡтарҙы таҙартыу менән шөғөлләнәсәк. Бөгөнгә техниканың дөйөм әҙерлеге һәм коммуналь хужалыҡтарҙың ҡомло-тоҙло ҡатнашма менән тәьминәте 100 процент тәшкил итә.

Шулай уҡ Салауат Сәхи улы ни өсөн урамдарға быға тиклем ҡулланылған һәм составы билдәле булған ҡомло-ташлы ҡатнашма ҡулланыуға өҫтөнлөк биреүҙәре тураһында ла аңлатып үтте. "Бер ҡышҡа нисә пар аяҡ кейеме алыштыраһығыҙ? - тип һорау менән мөрәжәғәт итте ул. - Әгәр Мәскәүгә оҙаҡҡа барырға булһағыҙ, бер нисә пар аяҡ кейеме алығыҙ, сөнки унда юлдарға һибелгән химик матдәләр аяҡ кейемен ашап, эшлектән сығара. Шуға, Өфөлә химия ҡулланырға тырышмайбыҙ, юҡһа, аяҡ кейемдәре тиҙ туҙыуҙа ла ҡала округы хакимиәтен сәбәп итеп ҡуйыуҙары бик мөмкин".

Урамдарҙы таҙартыуҙан тыш, коммуналь хеҙмәттәр ҡарҙы ҡаланан ситкә сығарыу менән дә шөғөлләнә. Ҡарҙың ниндәй урамдарҙан сығарыласағы билдәләнгән һәм бында төп шарт булып машиналарҙың үтеүен тәьмин итеү тора. Әммә бында ла сетерекле мәлдәр бар. Мәҫәлән, уҙған миҙгелдә ҡарҙың күпләп яуыуы һөҙөмтәһендә Коммунистик урамында Ленин һәм Карл Маркс урамдары киҫелешенә тиклем юл ситтәрендә ҡар өйөләп ятыуына күптәр шаһит. Ғәмәлдә иһә, быға тиклем унда тротуарҙар була һәм ҡар күп яуған йылдарҙа улар ваҡытлыса тротуарға өйөлөп, юл полотноһы транспорт өсөн асыҡ була. Юлдарҙы киңәйтеү һөҙөмтәһендә тротуарҙар алына, һөҙөмтәлә ҡарҙы өйөргә урын юҡ. Ул юл ситенә өйөлгәнлектән, урам таҙартылмаған тәьҫир ҡалдыра.

Һуңғы биш йылда ҡала һәм республика бюджеты иҫәбенә 116 берәмек махсус техника һатып алыныуға ҡарамаҫтан, ҡар таҙартыу техникаһына ҡытлыҡ бар. Бөгөн коммуналь хужалыҡтар балансында 410 берәмек техника иҫәпләнһә, шуларҙың 83 проценты иҫкергән. Әгәр нормативтар буйынса иҫәпләп ҡарағанда, Өфөнөң урам-юл селтәрен таҙартыу өсөн генә 1288 берәмек техника талап ителә. "Әгәр хатта аҡса табып, шул

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда республика ЮХХДИ-ның "Йәйәүле" иҫкәртеү операцияһы дауам итә. Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре йәйәүлеләрҙең һәм автотранспорт водителдәренең административ ҡануниәтте боҙоу осраҡтарын асыҡлау буйынса маҡсатлы эш алып бара.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең сираттан тыш IV съезы уҙҙы. Съезд тәүге рәйес, ғалимә Нәжибә Мәҡсүтованың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналды. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтен "Ирәмәл" сауҙа-күңел асыу комплексы директоры урынбаҫары, филология фәндәре кандидаты Гөлнур Ҡолһарина етәкләне.

✓15-18 декабрҙә Башҡортостандың баш ҡалаһында "XIV Халыҡ-ара хәрби сәнғәт форумы" үтә. Өфөнөң "Динамо" спорт комплексында Рәсәйҙең 40 төбәгенән һәм сит илдәрҙән ике меңдән ашыу спортсы, бергә-бер көрәш мәктәптәре вәкилдәре йыйыла.

✓Рәсәй тимер юлдары поездарға билеттарҙың 90 тәүлек алдан һатыла башлауы хаҡында белдерҙе. 10 декабрҙән алыҫ барған поездарға һәм дәүләт эсендә йөрөгән тағылмалы вагондарға 90 тәүлек алдан билеттар һатыла башлай. Әлеге ваҡытта алыҫ барған поездарға билеттарҙы 60 көн алдан алырға мөмкин. 2016 йылғаса билетты резервта һаҡлау ваҡыты 45 тәүлек тәшкил итте.

✓Яңы йыл алдынан баш ҡалалағы ҙур сауҙа-күңел асыу үҙәктәренең береһендә 10 декабрҙә сәк-сәктән шыршы бешерәләр. Ризыҡты теләгән һәр кем тәмләп ҡарай ала. Ойоштороусылар - "ЪUffet" рестораторҙар клубы билдәләүенсә, шыршы рәүешендәге сәк-сәк символик мәғәнәле Яңы йыл өҫтәленең биҙәге булып тора. Бындай һый илебеҙҙәге мосолман халҡының ҡунаҡсыллығын, ғаилә ҡиммәттәрен һәм йолаларын күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда 30 декабргә тиклем Ҡыш бабай почтаһы эшләй, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Федераль почта элемтәһе идаралығынан. Ҡала һәм район почтамты ҡарамағындағы барлыҡ үҙәк элемтә бүлексәләрендә махсус почта йәшниктәре ҡуйылған. Ҡотлауҙарҙы һәм телəктәрҙе көн һайын алыу ҡаралған. Хаттарҙы ошо адресҡа яҙырға кәрәк: 162390, Рәсәй, Вологда өлкәһе, Бөйөк Устюг ҡалаһы, Ҡыш бабай почтаһы.

✓ *Ғалимдар Шүлгәнташ мәмерйәһе диуарында дөйә һүрәтен тапты. Рәсемдә ҡаплаған уран-торий ҡатламының анализы уны 15-37 мең йыл элек үргә палеолит заманында төшөрөлгәнен күрһәткән.*



сама техника һатып алған хәлдә лә, уларҙы артабан тоторға кәрәк. Был тағы ла бюджетҡа, йәғни һеҙҙең менән беҙҙең кеҫәгә һуға. Шуға күрә, башҡа миҙгелдәрҙә бушҡа ултырған техника һатып алғансы, предприятиелар, "Сурсис" (Өфө-Аэропорт юлы, юл сиселештәре, күперҙәр ошо ойошма ҡарамағында), "Горзеленхоз" (барлыҡ парктар, скверҙарҙы хеҙмәтләндерә) МУП-тары менән килешеүҙәр төҙөп, аномаль ҡар яуыу ваҡытында өҫтәмә техника йәлеп итәбеҙ. Тәжрибә күрһәтеүенсә, транспорт йөрөгән юлдарҙы таҙартыу өсөн өҫтәмә рәүештә 67 берәмек техника кәрәк", - тип хәл-торошҡа аңлатма бирҙе С. Хөсәйенов. Был осраҡта, һандарға мөрәжәғәт иткәндә, бер берәмек техникаға - 367 мең квадрат метр (нормативтан 8 тапҡырға артыҡ), бер автогрейдерға 1 миллион 115 мең квадрат метр (нормативтан 4 тапҡырға күп) юл тура килә. Әле 20 тонналыҡ 9 үҙбушатҡыс һәм 9 шнекороторлы тейәгестәр һатып алыу мөмкинлеге ҡарала.

Торлаҡ хужалығы идаралығы йорт алды территорияларын таҙартыу өсөн 153 берәмек ҡар таҙартыу техникаһын, шул иҫәптән 122 - тәгәрмәсле, 13 - сылбырлы, 18 МКСМ (күп маҡсатлы коммуналь-төҙөлөш машинаһы) старт һыҙығына ҡуйған. Тәгәрмәсле техниканың эшкә сығыу-сыҡмауы, уның маршруттан тайпылмауы реаль ваҡытта "ГЛОНАСС" юлдаш системаһы аша күҙәтелә.

Көн һайын йорт алды территорияларын таҙартырға 950 урам һепереүсе сыға. Районлар ошо кадрҙар менән яҡынса 91 процентҡа тәьмин ителгән. Уларҙың 60 проценты ҡалаға яҡын райондарҙан, ауылдарҙан килеп эшләүселәр. Төҙөкләндереү буйынса хеҙмәткәрҙәргә ятаҡтан урын бирелә, уртаса эш хаҡтары 22-25 мең һум. Көҙгө-ҡышҡы осорҙа ҡаланың барлыҡ муниципалитеттарында ла эш ике сменала ойошторолған.

Көслө ҡар яуыуынан һуң йорт ихаталарын таҙартыу маҡсатында идара итеү ойошмалары тарафынан ихаталарҙы комплекслы таҙартыу графигы эшләнгән һәм раҫланған. Былтырғыса, улар Өфө ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында ҡуйыласаҡ, сөнки былдай ысул үҙен аҡлаған һәм ихаталарҙы таҙартыу эшен тиҙ, сифатлы башҡарыу мөмкинлеген бирә. Шулай ҙа, график эленеүгә, халыҡ алдан иҫкәртелеүгә ҡарамаҫтан, йорт алдарында парковкаланған машиналарҙың ҡайһы бер хужалары таҙартыу эштәре барышында автотранспортын күсереп торорға йәки алып ҡуйырға ашыҡмай. Был йәһәттән, Салауат Сәхи улы ихаталарҙан транспорт алынмай икән, үтеп булған территория ғына таҙартыласаҡ йәки бөтөнләй таҙартылмаясаҡ, тип белдерҙе. Техника эвакуацияланасаҡ тип борсолорға ла түгел - был процедура башҡарылмаясаҡ, әммә граждандарҙың һайлау хоҡуғы үҙҙәренә бәйле - машиналарҙы билдәле бер көндә ихатанан алып сығып, территорияны таҙарттырырғамы, әллә ҡарға бата-сума йөрөргәме?

Матбуғат конференцияһы барышында Салауат Хөсәйенов журналистарға хәл-торошто халыҡҡа объектив аңлатыуҙарын, аңлашылмаған ваҡыттарҙа хакимиәттең Мәғлүмәт-аналитика идаралығына (347) 279-05-62 (матбуғат хеҙмәте) йәки электрон почта аша (pressa@ufacity.info) мөрәжәғәт итеүҙәрен, ниндәйҙер күренеш буйынса власҡа кире ҡараш тыуҙырырға тырышырға түгел, киреһенсә, репортаждар, һүрәтләмәләр, комментарийҙар аша уның эшенә ярҙам итеүҙәрен һораны.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН*

# ШҮЛГӘНТАШ...

## серҙәрен асыуҙы дауам итә



**(Башы 1-се биттә).**

Яңыраҡ Андорранан реставрациялаусы Эдуаль Гийаме алып барған ошондай эштәр барышында ғалимдар Шүлгәнташ мәмерйәһе диуарында дөйә һүрәтен тапты. Рәсемдә ҡаплаған уран-торий ҡатламының анализы уны 15-37 мең йыл элек үргә палеолит заманында төшөрөлгәнен күрһәткән. Дөйә һыны 1970 йылдарҙың аҙағынан билдәле "Аттар һәм билдәләр" полихром панноһында табылған. Ғалимдар һөйләүенсә, картина элементтарының нисек төшөрөлөүе һәм уларҙың урынлашыуы хәҙерге Францияның көньяҡ һәм Испанияның төньяҡ биләмәһендә барлыҡҡа килгән таш быуат сәнғәте йолалары менән таныш рәссамдар тарафынан һынландырылыуы хаҡында бәйән итә. Европаның был өлөшө һуңғы боҙлоҡтар башланған дәүерҙә "цивилизация сығанаҡтары"ның береһе һәм 20-37 мең йыл элек Ер шарында халыҡ нығыҡ тығыҙ ултырған район булған. Европалағы ҡая һүрәттәрендә дөйәләр осрамай, уларҙы Шүлгәнташҡа яҡынырак урынлашҡан Монголия һәм Игнатьев мәмерйәләрендә генә күрергә мөмкин. Был художество йолаларының Көньяҡ Урал биләмәһендә үҙаллы үҫешеүе һәм һөҙөмтәлә Францияның художество яңылыҡтары менән тығыҙ бәйләнеп китеүе хаҡында һөйләй.

Ғалимдар мәмерйәләрҙә ер аҫты залдары һәм галереялары диуарҙары йәйгеә ҡарағанда нығыраҡ ҡороғас, декабрҙә өйрәнеүен дауам итәсәк. Ул һүрәттәрҙең бәләкәй генә деталдәрен асыҡларға мөмкинлек бирәсәк. Шулай уҡ белгестәр реставрациялау эшен башлар өсөн уларҙың торошон ҡайтанан тикшерәсәк.

"Хаос залында "Аттар һәм билдәләр" һүрәттәр композицияһын реставрациялауға һәм консервациялауға 1976 йылда О.Н. Байдер экспедицияһы башлаған рәсемдәрҙә ағып төшкән кальцит ҡатламдарынан таҙартыуҙы тамамлау инә. Эштәрҙе башҡарғанда заманса методика һәм һүрәттәрҙе ҡаплаған ҡатламды алыу техникаһы ҡулланыла. Яңы алым 1970 йылдарҙа реставраторҙар ҡалдырған кальцитты механик боҙоу эҙҙәрен бөтөрөргә, композицияның эстетик торошон яраһы уҡ яҡшыртырға, шулай уҡ яңы һүрәттәрҙе таҙартып бөтөргә һәм уларҙың ҡушма элементтарын тулыраҡ асырға мөмкинлек бирҙе", - тип һөйләнеләр Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәгендә.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*



# УЙЫНДАРҘАН СИТЛӘШТЕРЕЛДЕК...

**Халыҡ-ара олимпия комитеты Рәсәйҙең Олимпия йыйылма командаһын киләһе йылда Көньяҡ Кореяның Пхенчханында уҙасаҡ Олимпия уйындарынан ситләштереү тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай уҡ Рәсәйҙең Олимпия комитеты квалификацияһыҙланды. Вице-премьер Виталий Мутко, элекке спорт министры урынбаҫары Юрий Нагорный ғүмерлеккә Олимпия уйындарынан ситләштерелде, Александр Жуковтың комитет ағзаһы булыуы туктатылды. Ә теләге булған спортсыларға Олимпияның нейтраль байрағы аҫтында сығыш яһарға рөхсәт ителде. Әгәр ҙә инде улар үҙҙәрен "тәртипле" тотһалар, Олимпиаданы ябыу тантанаһында Рәсәй байрағын тотоп үтергә мөмкин буласаҡ. Бында шундай оло "мәрхәмәтлелек" күрһәттеләр.**

Беҙгә төрлө яҡлап ҡыҫым яһауҙарына өйрәнеп тә бөттөк. Спортҡа ла баҫым яһай-яһай, хәҙер килеп Рәсәй спортын бөтөнләй һыҙып ташларға итәләр. Ни өсөн беҙҙе шулай кәмһетәләр һуң? Яуап ябай - Сириялағы хәрби, ОПЕК-тағы сәйәси уңыштарыбыҙ, газ торбалары үткәреп, Евразияны ҡорос сым менән бергә тоташтырыуыбыҙ, Арктикалағы эшмәкәрлегебеҙ һәм башҡа күп өлкәләрҙәге ҡаҙаныштарыбыҙ өсөн санкциялар былар.

Ҡайһы бер спортсылар Олимпиадала тәҡдим ителгән шарттарға ярашлы сығыш яһарға әҙер булыуҙарын белдерҙе. Шулай уҡ уларҙы хуплаған һәм Олимпиадаға ебәреү яғында булған спорт өлкәһендә эшләүсе етәкселәр ҙә бар. Әлбиттә, спортсыларҙың теләге аңлашыла. Оҙаҡ йылдар буйы көсөргәнешле әҙерләнеүҙәрҙе аңһыҙ ҡарар менән юйып ташлау ауыр киселеләр. Ләкин команда рухы, допинг ҡулланғандар, тип бысраҡ яғылған башҡа спортсыларға ҡарата теләктәшлек тигән төшөнсәләрҙе ҡайҙа итергә? Олимпия уйындарынан ситләштереү теге йәки был спортсыға, йыйылма командаға ғына ҡағылмай, а тотош илдең йөҙөнә тәҡөрөүгә бәрәбәр. Ошонан һуң, уйындарға барған хәлдә лә, судьяларҙан ниндәй объектив хөкөм көтөргә мөмкин? Эйе, шундай мәртәбәле уйындарҙан тороп ҡалыу үкенесле. Ләкин ҡот осорлоҡ бер нәмә лә булманы - илдә спорт үлмәне, спортсыларға иғтибар кәмемәне...

Ысынында, Олимпия уйындары күп ҡырлы мәсьәләнең бер осо ғына. Рәсәйгә бәйләнеүҙәр спортта ғына түгел, ә төрлө өлкәгә ҡағыла. Был ҡыҫырыҡлауҙарға нисек яуап бирергә һуң? Бәлки, мәҫәлән, Ҡытай, Иран һәм Евразияның башҡа илдәре менән бергә Олимпия уйындарына параллель итеп Евразия Олимпия уйындары уҙғара башларғалыр? Шулай уҡ икенсе илдең ҡуҙәтеүе аҫтында булған интернет селтәренән ҡотолоп, үҙебеҙҙекен булдырырға. Үҙебеҙҙең Нобель премияһы һымаҡ премияны булдырып, фән өлкәһендәге уңыштары өсөн Рәсәй һәм Евразия илдәре ғалимдарын бүләкләй башлау ҙа бер ни тормай һымаҡ. Дөйөмләштергәндә, Рәсәйгә үҙенең партнерҙары һәм союздаштары менән берлектә халыҡ-ара кимәлдәге сәйәси, мәғлүмәти, спорт, энергетика һәм башҡа өлкәләрҙә параллель структура төҙөү ваҡыты килеп етте. Шуға күрә, тойғоларҙы ситкә ҡуйып тороп уйлағанда, Рәсәйҙе Олимпия уйындарынан ситләштереү беҙгә, бер яҡтан, файҙалы ла. Сөнки быны спортта ғына түгел, ә бөтә өлкәләгә эшмәкәрлекте яңы йүнәлештә үҫтерергә этәреүсе бер аҙым, тип ҡарарға мөмкин.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Женьшень

❖ Атеросклероз, диабет үҫешен туҡтатыу, хәтерҙе нығытыу, нервы ауырыуҙарын һәм импотенцияны дауалау өсөн кипкән женьшень тамырын ҡулланығыҙ. 50 грамм тамырҙы ҡайнатып һыуытылған һәм бер аҙ шәкәр ҡушылған һыуҙа 3 сәғәт төнәтегеҙ, һуңынан тамырҙы ваҡлап турағыҙ һәм ярты литр араҡыла 20 көн тотоғоҙ. Төнәтмә бүлмә температураһында ҡараңғы урында ултырһын. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып тороғоҙ. Әҙер булғас, көнөнә 1 тапҡыр, ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 30-40 көн. Тағы ла дауаланыуҙы оҙайтырға кәрәк тип тапһағыҙ, бер ай ял итеп алығыҙ һәм 1 курс ҡабатлағыҙ.

## Бәүел тотмағандан

❖ 1 ҡалаҡ укроп орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, урап, 2-3 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм шунда уҡ эсергә. Көнөнә 1 тапҡыр, һауыҡҡансы дауаланырға.

## Һыйырғойроҡ үләне

❖ Астма, бронхит, эмфизема, быума йүтәл, үпкә шешеүе, дизентерия, ашҡаҙандың катараль шешеүе, тамаҡ ауыртыуы, һарылыҡ, бауыр сирҙәренән эмаль һауытҡа 200 мл ҡайнар һыу һәм 1 ҡалаҡ һыйырғойороҡ үләне (коровяк) сәскәһен һалырға, һыуынғансы тоторға, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ һыйырғойроҡ үләне сәскәһе, 1-әр ҡалаҡ йүкә, мәрүәт (просвирник приземистый) һәм ҡурай еләге сәскәһенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, көнөнә 3 тапҡыр 50-шәр мл эсергә. Хәл яҡшырғансы эсергә.

## Гастрит

❖ Ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе шешеүе - гастриттан, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге сей яраһынан дауаланыу өсөн 600 грамм етен орлоғон тирмәндә тартып, сөгөн кәстрүлдә 2 стакан һыу менән болғатып, 2 сей туҡылған йомортҡа ҡушып, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, болғап торорға. Уттан алғас, 0,5 кг бал һәм аҡ май ҡушырға, тағы ла ҡайнау хәленә еткерергә, болғата-болғата 7 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Һыуытҡыста һаҡларға. Дауаланыу курсы - 1-1,5 ай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Ҡөрәйштәргә ҡаршы яу

Быуанан алыҫ булмаған урында Мөхәммәт бәйғәмбәр өсөн сатыр ҡорола. Сатыр янына көслө һаҡ ҡуйыла, эйәрләнгән дөйәләр әҙерләнә. Ғәскәре еңелә башлаған осраҡта Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәҙинәгә ҡасырға тейеш була - был шартты мосолмандар үҙҙәре үк ҡуя. Сөнки улар аңлай: Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һәләк булыуы бөтөн изге башланғыстарҙың да юҡҡа сығыуын аңлатасаҡ. Үҙҙәренә ҡарағанда ике тапҡырға күберәк дошманды еңеү еңел булмаясағын да аңлай улар.

Һуғышҡа әҙерлек эштәрен Мөхәммәт бәйғәмбәр тәжрибәле яугирҙарға тапшыра, ә үҙе яугирҙарҙың рухын нығыта, вәғәздәре менән еңеүгә ышаныстарын арттыра.

Төн етә. Был төндә ҡөрәйш мәжүсиҙәре мосолмандарҙан бер нисә километр ғына алыҫлыҡта үткәрә. Улар һыуһыҙ интегә. Икенсе көн таң менән юлға сыҡҡас, мосолмандарҙы күреп ҡалалар. Улар, шишмәләрҙең быуылғанын күреп, яу алдынан һыуһындарын да ҡандыра алмаясаҡтарын аңлай.

### Бәҙәр һуғышы

Йола буйынса, һуғыш баһадирҙарҙың бер-береһе менән алышыуынан башлана. Ҡөрәйш мәжүсиҙәре яғынан өс кеше - ҡасандыр Тайф оазисында Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе ярһыған халыҡтан ҡотҡарып алып ҡалған Үтбә менән Шәйбә исемле ағалы-ҡустылы бәһлеүәндәр һәм Үтбәнең улы сыға. Ул көсө буйынса ла, оһоллоғо буйынса ла атаһынан һис ҡалышмай. Уларға ҡаршы әзмәүерҙәй һынлы өс ансар сығып баҫа. Тик ҡөрәйш мәжүсиҙәре ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡысҡырыша башлай.

- Беҙҙекеләргә ҡаршы үҙебеҙҙең хыянатсылар сыҡһын, Мәҙинә халҡына үсебеҙ юҡ, - ти улар.

Был дәғүәне мосолмандар ҡабул итә һәм алға Хәмзә, Ғәли һәм Ғөбәйҙә исемле батырҙар сыға. Алыш башлана. Көстәре менән генә түгел, иҫ китмәле яу оһоллоғо менән дан алған Хәмзә менән Ғәли күҙ асып йомған арала үҙҙәренә ҡаршы сыҡҡан Шәйбә менән Үтбәнең улын үлтереп тә ҡуя һәм икеһе бер юлы Ғөбәйҙә батырға ярҙамға ашыға. Ошо арала Үтбә Ғөбәйҙә батырҙың аяғын сабып өҙә. Үтбәне үлтерәләр. Ғөбәйҙә батыр ҙа, ҡанын күп юғалтыуҙан, йән бирә.

Баһадирҙар алышынан һуң ике яҡ та төҙҙә уҡ атыша, аҙаҡтан ҡул һуғышы башлана. Был яуҙа мөһәжирҙәр айырыуса аяуһыҙ алыша. Уларҙың береһе, Муад ибн Әмир ҡылысы менән Әбү Джәхелдең аяғын яралай. Ләкин Әбү Джәхелдең улы килеп етеп, Муад ибн Әмирҙең ҡулын өҙә тиерлек саба - ҡул тирелә генә аҫылынып тороп ҡала. Ләкин Муад ибн Әмир яу яланынан китмәй, алышыуҙы дауам итә. Һәленеп торған ҡулы, хәрәкәт ыңғайына төрлө яҡҡа болғанып, уға ҡамасаулай, шуға ул ярала ҡулын аяғы менән баҫып өҙөп ырғыта. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, ләкин ошо яуҙа бик күп ҡан юғалтҡан Муад ибн Әмир тере ҡала. Аҙаҡ ул байтаҡ яуҙарҙа ҡатнаша, һиҙәр ҡуллы булыуына ҡарамаҫтан, иҫ китмәле батырлыҡтар күрһәтә. Был яуҙа иһә ул Әбү Джәхелде үлтереп өлгөрмәй. Ауыр яра алған Әбү Джәхел икенсе бер мөһәжир ҡулынан һәләк була.

Етәксеһеҙ ҡалғандарын күргәс, ҡөрәйш мәжүсиҙәре ҡаса башлай. Был яуҙа уларҙың иллегә яҡын яугиры һәләк була, күптәр әсиргә эләгә.

(Дауамы бар).

АЛҠЫШ - БАЛАЛАРҒА!

# "УРАЛ БАТЫР" - ӘКИӘТ ТҮГЕЛ,

## ул баланы изгелеккә өндәүсе мәктәп

**"Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын яттан һөйләү буйынса конкурстар үткәреү күптән инде матур йолаға әйләнгән. Ул саралар был мәшһүр әҫәрҙе тулыһынса яттан белгән, 4500 ашыу шиғри юлды төрлө урындан дауам итеп һөйләй алған иҫ киткес талантлы быуын тәрбиәләүгә булышлыҡ итеүе берәүгә лә сер түгел хәҙер. Ошо көндәрҙә Башҡортостан социаль технологиялар институты һәм республиканың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты һигеҙенсе тапҡыр "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең Халыҡ-ара конкурсын үткәреп, яңы таланттар асты.**



Өфө ҡалаһында үткән был конкурс "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең республика кимәлендәге ярышынан статусы менән генә айырылмай. Ул эпосты башҡа милләттәр теленә тәржемә итеп ятлау мөмкинлеге биреүе менән дә үҙенсәлекле. Әйткәндәй, **быйыл ярышта өс йөҙҙән ашыу мәктәп уҡыусыһы һәм вуз студенттары ҡатнашты, улар эпосты йәмғеһе 42 телдә һөйләп ишеттерҙе.** Башҡорт, рус һәм инглиз телендә башҡарыусылар, Башҡортостан, Рәсәй һәм донъя халыҡтары телдәрендә һөйләүселәр икешәр секцияға бүленде, һәр аудиторияла уларҙы компетентлы жюри ағзалары баһаланы. Ә быма туғыҙынсы секция республикаға сит илдән күсеп килгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балалар өсөн тәғәйенләнгәйне, уның эшендә ҡатнашҡан йәштәр Башҡортостан, башҡорт халҡы, тарихы, мәҙәниәте, әҙәбиәте менән яҡындан таныша, аралаша алды. Һәр секция эшенә айырым йомғаҡ яһалды һәм еңеүселәргә БР Мәғариф һәм Мәҙәниәт министрлыҡтары, Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты тарафынан иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды. **Эпосты башҡорт телендә ятлаусылар араһында Йылайыр районынан Гөлнәзирә Мәхмүтова һәм Илеш районынан Айгөл Ғәмбәрованың сығыштары иң юғары баһаға лайыҡ булды. Инглиз телендә Күгәрсен районынан Нәркәс Баймырҙина, Сибай ҡалаһынан Илзирә Сәлихова жюри ағзаларын башҡарыу оҫталығы менән хайран итте.**

- "Урал батыр" эпосын бишенсе синыфта уҡығанда ятлай башланым. Әсәйем башҡорт рухлы булып үҫеүемде теләп, минә эпосты ятларға тәҡдим итте, - тине еңеүселәрҙең береһе Гөлнәзирә Мәхмүтова. - Хәҙер мин "Урал батыр"ҙы тулыһынса беләм һәм әсәйемә сикһеҙ рәхмәтлемен. Еңеүҙәрем өсөн дә, үҙемде ысын башҡорт ҡыҙы итеп тойорға, халҡым менән ғорурлана белергә өйрәткәне өсөн дә. Бөгөн конкурста бөтә ҡатнашыусыларҙы ла ҡарап, тыңлап ултырҙым һәм башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын ихлас өйрәнеүселәрҙе күреү ҡыуандырҙы.

"Урал батыр" эпосын Һиндостан, Израиль илдәрендә лә ҡыҙыҡһынып өйрәнәләр. Һиндостан балалары Урал батыр тураһында интернет селтәрендә тапҡан мәғлүмәтте туплап, бик ҡыҙыҡлы видеояҙма төшөргән. Ойоштороусылар әйтеүенсә, быйыл эпос төүге тапҡыр грек, испан, итальян, пуштун телдәрендә яңғыраған. Ҡатнашыусылар тексты үҙҙәре тәржемә итеп, әҙерләнеп килгән. Бәлки, уларҙың тәржемәһе камил да түгелдер, ләкин ҡайһы бер ҡатнашыусыларҙың үҙе өсөн иң ҡәҙерле туған телендә башҡорт халҡының эпосын һөйләргә теләүе, бының өсөн сит телдән тәржемәгә тотоноуы уҡ күп нәмә тураһында һөйләй. **Асҡын урта мәктәбенең 6-сы синыф уҡыусыһы Аделина Вәлишина эпосты испан теленә тәржемә иткән,** бының өсөн уға испан телен тыуғандан алып белгән кешеләр менән интернет аша бәйләнештәр булдырырға, тәржемәнең дөрөҫлөгөн тикшерергә тура килгән. Ә бына **Ейәнсура районы Һабыр урта мәктәбе уҡыусыһы Алтынай Атангулова эпосты өс телдә - башҡорт, рус, инглиз телдәрендә ятлаған.**

- "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса үткәрелгән конкурстарҙа йыл һайын ҡатнашам, ә быйылдан башлап эпосты инглиз һәм рус телендә ятланым. Уны ятлауы бик ҡыҙыҡ, ул әкиәт кенә түгел, ә беҙҙе батыр булырға, гел дөрөҫөн генә һөйләргә, маҡсатыңа табан ныҡышмалы барырға өйрәтә, - ти Алтынай. Әйткәндәй, берәүҙәр эпосты бер телдә генә һөйләп сыҡҡансы, ул өс секция эшендә ҡатнашып, өс телдә шартлатып һөйләп, ҡумыҙҙа уйнап та өлгәрҙе.

Балаларҙың "Урал батыр"ға ҡарата был ҡыҙыҡһыныуы, тәү сиратта, уҡытыусыларҙан килһә, уларҙың бөтә башланғыстарын күтәрмәләп торған ата-әсәләрҙең дә тырышлығы ҙур. Балалары талантлы, белемле булып үҫеүен теләгән һәм бының өсөн бер нәмә лә йәлләмәгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнә беҙҙең киләсәк быуын. Халыҡ-ара конкурста ҡатнашыусылар тағы бер тапҡыр шуны дәлилләне, тиһәк тә яңылыш булмаҫ. Иң мөһиме, сит телдәрҙе үҙебеҙҙең башҡорт халҡының әҙәби мираҫы аша өйрәткән педагогтар һәм ата-әсәләр булыуы ҡыуандырҙы. Балалар урыҫ, инглиз телендә башҡарһа ла, башҡорт халҡының быуаттар дауамында быуындарға тапшырыла килгән был эпосы уларҙың фекерләү рәүешенә, рухи донъяһына тәьҫир итмәй ҡалмаясаҡ. Был турала конкурстың жюри ағзаһы, Сибай ҡалаһының "Агинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Асия Ғәйнуллина ла әйтеп китте: "Башҡорт халҡының эпосы менән бөтәһе лә ҡыҙыҡһына. Сөнки унда ыңғай энергия һалынған, тыңлаған кешене лә, һөйләүсене лә ҡанатландыра, яҡшылыҡҡа әйҙәй торған фәһемле яҡтары күп. Борондан башҡорт халҡының сәсәндәре хан әргәһендә йөрөгән сәйәсмән булған, бөгөн дә шундай зирәк аҡыллы, талантлы, хәтере шәп йәш быуын үҫеп килеүен күрҙек", - тине ул конкурсҡа йомғаҡ яһап.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең Халыҡ-ара конкурсының төп маҡсаттарының береһе итеп башҡорт халҡының һәм республикалағы башҡа халыҡтарҙың тарихы һәм мәҙәни мираҫына һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү бурысы билдәләнгәйне. Өс йөҙҙән ашыу бала күңеленә ойоштороусылар ошо идеяны еткерә алған хәлдә лә, күпме йәш быуын башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын, телен, тарихын ихтирам итәсәген күҙалларға мөмкин. Киләсәктә лә балалар күңелен үҫтереүгә, таланттар асыуға һәм, иң мөһиме, рухи тәрбиә биреүгә йүнәлтелгән был конкурс дауам итһен, ойоштороусылар көсөн, ваҡытын ғына түгел, бүләктәрен дә йәлләмәһен ине.**

Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА.

✔ *Балыҡсы - башҡорт этносының ырыуы. Революцияға тиклем Балыҡсы улысы Өфө губернаһының Бөрө өйәҙенә ҡараған. Хәҙерге ваҡытта балыҡсылар Асҡын районында, Ҡариҙел районының Асҡын ауылында йәшәй.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# КЕМ УЛ БАШҠОРТ ХАН?



**Һәүәҫкәр тарихсы Йәдкәр Бәшировтың ошо көндәрҙә генә донъя күргән "Башҡорт хан" тип аталған баҫмаһы тураһында һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ.**

➔ **Бөйөк Башҡорт хан исемен йөрөткән ҡалалар исемлегенә Өфөнөң дә инеүен ишеткәнебеҙ бар, ә Яр Саллының... башҡорт ҡалаһы тип аталыуы бер аҙ аптырата ла. Тағы ла ниндәй ҡалалары булған Башҡорт хандың?**

- П.И. Рычков беренсе тапҡыр XVIII быуатта, боронғо башҡорт яҙмаларына, башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың һөйләгәндәренә таянып, Бахши Иман болғар йылъяҙмаларындағы Гази-Бараджа теркәгәндәргә һылтанып, Өфө ҡалаһының Имәнҡала тип аталыуын билдәләй. Был хаҡта аҙаҡ ғалимдарыбыҙ Н.А. Мәжитов, Ф.А. Сөнәғәтов, Ә.Н. Солтановалар ҙа яҙа. Болғар йылъяҙмаһында былай тиелә: "Өфө 1185 йылда Мәсғүт тархан тарафынан төҙөлә... уның ағаһы Татрының урыҫ ҡәлғәһе Өфөгә яһаған походы иҫтәлегенә..." Ҡала ҙур ҡәлғә хәлендә була һәм 1183 йәки 1184 йылдарҙа ҡолатыла, унан һуң "Мәсғүт Ағиҙел ярына яңы ҡәлғә ултырта һәм уны "Өфө" тип атай - ағаһы иҫтәлегенә". Башҡортостан ғалимдары, ҡала хаҡында күп мәғлүмәттәр йыйғандан һәм тикшереү эштәре алып барғандан һуң, әлеге Өфө аҫтындағы ҡаласыҡтың, йәғни Имәнҡаланың, урта быуаттарҙағы Башҡорт ҡалаһын дауам иттереүсе булыуын асыҡланы.

Артабан Бахши Иман яҙыуынса, "1186 йылда Башҡорт хандың ейәне Ғабдулла хан хәрби идараһыһы Сын-Булат менән Өфө ҡәлғәһенә килә һәм унда үҙҙәренең ставкаһын булдыра. Күп тә үтмәй, Яйыҡ, Бүләр, Яр Саллы, Миңзәлә ҡәлғәләренә ҡараған юлдарҙы нығыта башлайҙар.

Был тәңгәлдә артыҡ оҙон һөйләп тормағанда, ҡаланың Башҡорт ҡала булыуына шик юҡ. Һәм тағы ла, Бөйөк Башҡорт хан хөрмәтенә "Башҡорт" атамаһын күтәргән ҡалалар берәү генә булмаған. Мәҫәлән, Яр Саллы ҡәлғәһенең дә беренсе исеме Башҡорт була. 1171 йылда Ҡол-Ғәленең атаһы мулла Мир-Худжа батша Ғабдулла Чельбирға (Башҡорт хандың ейәне) үҙ ставкаһы урынына ҡәлғә төҙөүгә рөхсәт һорай. Батша былдай үтенестәрҙе хуплаған һәм йыл тигәндә был ҡәлғә ҡалҡып та сыҡҡан. Ҡаланы ҡорым-саллы төҙөүселәре төҙөй һәм шул нигеҙҙә Яр Саллы тигән рәсми булмаған исемгә лайыҡ була ла. Ҡәлғәнең башлығы итеп Алтыш бәк билдәләнә. Алтыштың улы Вәсил ҡаланы киңәйтә, ә уның улы Ашан 1236 йылда яңғынан һуң ҡабаттан тергеҙә. 1278 йылда башҡорттар Ашандың улы Хәлик түрә етәкселегендә ҡаланы Ҡарым-Тимур татарҙарына бирмәү өсөн бик айбар алыша һәм уларға йылға аша сығырға бирмәй. Ошо ваҡиға иҫтәлегенә Башҡорт хандың ейәне әмир Мөхәммәт-Әләм был ҡәлғәне Башҡорт атамаһы менән атата. Тимәк, бөгөнгө Яр Саллы ҡалаһы ла ошо абруйлы исемде күтәргән ҡалаларҙың береһе була.

XII быуат ғәрәп авторы Шәриф Идрисиҙең яҙмалары буйынса, күп ҡәбиләләрҙән торған, феодаль ерҙәр менән идара иткән башҡорт ата-бабалары былай һүрәтләнә: "Басжирттар иле бик ҙур, уның өлөштәре бер-береһенән алыҫ араларҙа ята. Тышҡы басжирт ерҙәре Һаҫыҡ ерҙәргә тиклем һуҙыла (Көнбайыш-Себер һаҙлыҡтары). Эске басжирттар иле үҙәгенән алып, тышҡы басжирттар үҙәгенә тиклем 11 туҡталыш бар..." Был ҡалаларҙың атамалары түбәндәгесә: Биләр, Сыуар (Сувар, Һыуар), Башҡорт, Яр Саллы, Жукотин (Джукетау, Йүкәтау), Нуҡрат, Джуннэҡала (Йәнле ҡала), Тамьятархан, Тубылғытау, Сөнҡала, Кирмәнсуҡ. Әл-Идриси яҙмаларынан тағы ла Ҡаруҡия, Намъян, Гүрхан, Масра, Ҡорса ҡалалары билдәле (бөгөнгө Татарстан республикаһында Масра, Ҡорса тигән ауылдар бар).

Биләр ҡалаһы Тамта илендә урынлаша (был ил 1193 йылдан Башҡорт иле итеп иғлан ителә), Держаның баш ҡалаһы була. Был оло ҡалала 200 меңләп кеше йәшәй. Бында Ҡол-Ғәле кеүек күп кенә билдәле шәхестәр көн итә, уҡый.

Биләр урта быуат цивилизацияһының иң ҙур ҡалаларының береһе иҫәпләнә. Киев, Чернигов ҡалаларының ҡәлғә өлөшө 100-әр гектар, Париж - 439, Милан - 234, Неаполь, Лондондар 200-шәр гектар ер биләп ултырһа, Биләр ҡалаһы хатта профессиональ архитекторҙарҙы ла хайран итеп, 800 гектар ергә йәйелә.

Джукетау, рустар әйткәнсә, Жукоткин (беҙҙеңсә Йүкәтауҙыр) Ҡама (Ағиҙел) йылғаһының һуң яҡ ярында урынлаша. Башҡорт хандың ейәне Ғабдулла хакимлыҡ иткән осорҙа был ҡала ла Башҡорт исемен йөрөтә.

Жуннэ-ҡала (Йәнле ҡала) тип Нижний Новгород ҡәлғәһе аҫтындағы ҡала аталған була. Ул күп тапҡырҙар берсә урыҫтар, берсә башҡорттар ҡулына күсеп, 1445 йылда урыҫтар тарафынан яулап алынып ҡуя.

Ҡама аръяғындағы билдәле ҡалаларҙың береһе - Тубылғытау. Уның баштағы атамаһы Шишмә-сабан була. Бында һабан һәм саҡ-суҡ ырыуҙары башҡорттары йәшәй. Монгол-татарҙар килгәс, ҡала Тубылғытау итеп үҙгәртелә.

Р. Фәхретдиновтың яҙмалары буйынса, Ҡама аръяғында ғына ла 25 ҡала, ә Ф. Хузин эҙләнеүҙәренә таянғанда, 104 ҡаласыҡ булыуы билдәле. Быларҙың 46-һы феодаль замоктар (һарайҙар), 28-е хәрби ҡәлғәләр, 17-һе боронғо ҡалалар ҡалдығы һ.б. Күп ҡалалар исеменә "кирмән" һүҙе бәйле. Был һүҙ һарай, замок тигәнде аңлатҡан (Ошоға "тирмә" тигәнде лә алып килеп бәйләргә мөмкин). Мәҫәлән, Кирмән - Йәрмәкәй районындағы тау, Аҡкирмән - Ырымбур өлкәһендә, Түбәнге Новгород та бер мәл Үкирмән тип атала. Ҡасимов ҡалаһы - Ханкирмән, Белгород - Аҡкирмән, Севастополь - Һары кирмән, Киев - Манкирмән һ.б.

Был ҡалалар хаҡында ентекләп китапта яҙылған.

➔ **Китапта боронғо башҡорттарҙың хәрби тормошо ла бик ҡыҙыҡлы итеп бирелә. Һәр ырыу үҙ аллы автоном ойошма, уның үҙ "бүреһе", үҙ хәрби көстәре бар. Унан килә, бөгөнгө башҡорт телендәге уйламаған һүҙҙәрҙең хәрби дәрәжә аңлатмаһы булыуын асыҡлайһығыҙ. Шуларға туҡталып үтәйек әле?**

- Ғәскәрҙең ҙур өлөшлөһө "Тауыш" тип аталыуҙан башлайыҡ, булмаһа. Ни өсөн тауыш? Ғәскәр башлығының тауышын ишеткән тиклем һандағы һуғышсылар бер тауышҡа, йәғни бер төркөмгә ингән. Һуғышсылар ҙа ҡәҙимге көнкүреш атамалары менән аталған. Мәҫәлән: ярҙамсылар, булышсылар, ҡулдар, уҡсылар, өлкән ҡарауылсы, өлкән һаҡсы, бөркөткүҙ - күҙәтеүсе, ябалаҡ - төнгө күҙәтеүселәр, һаҡҡолаҡ - часовой һ.б.

Хәрби званиелар ҙа ябай: кеше - бөгөнгө ефрейтор, сержанттан башлап старшинаға тиклемге чин; өлкән кеше - прапорщик; егет - лейтенант, өлкән егет - старший лейтенант, батыр егет, ир егет - капитан, батыр - майор, түрә - полковник, ян түрә - подполковник. Ирҙәр - ветеран яугирҙар, юлдаш - яугир, бала - әле хәрби һынау үтмәгән йәштәр.

Ҡәбилә союзы кәрәк булғанда үҙҙәренең Баш Түрәһен алмаштыра ла алған. Баш Түрәнең, ғәҙәттә, 4 урынбаҫары булған, мәҫәлән, Йән Түрә, Ян Түрә. Миҫал өсөн ҡарап киткәндә, табын ырыуында Баш Түрә Баш Табын тип атала, урынбаҫарҙары Кесе Табын, Йомран Табын, Ялан Табын һ.б. Оло йыйындарҙа һәр ырыуҙан Йән Түрәләр, Ян Түрәләр, ҡанбабалар, ҡанбикәләр, батырҙар, өлкән егеттәр, ир-егеттәр, ир-бүреләр, Олуғ Ҡан Баба кеүек кешеләр ҡатнашҡан һәм был исемдәрҙең һәр береһенең артында оло мәғәнә, тәрән аңлатма ятҡан.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Ҡаңлылар

Ҡаңлыларҙың алыҫ ата-бабалары көньяҡ Уралда йәшәгән. Шунан улар урта һәм алғы Азияға хәрәкәт итеп, Туранда үҙ дәүләтен төҙөп, бер нисә быуат йәшәй. Ҡаңлылар ырыуы бер нисә аймаҡҡа бүленгән. П.Рычков яҙыуынса, улар иҙел ҡаңлыға, ҡыр ҡаңлыға, йөрәктау ҡаңлыға, аҡтау ҡаңлыға бүлеп йөрөтөлгән.

Һары түбәлә ҡаңлыларҙың үҙәй ырыуы хакимлыҡ иткән, улар үҙҙәрен бүләр һәм бәйләр тип атаған. Был ҡәбилә үҙ мәлендә сабандар менән берлектә бәшәнәктәрҙе етәкләгән, әммә улар сабандарға ҡарағанда һан буйынса әҙерәк булған, шуға күрә бәшәнәктәрҙе ҡайһы саҡта ҡаңлылар тип түгел, ә сабандар тип атайҙар.

Хәҙерге ваҡытта ҡаңлы ырыуы башҡорттары Бүздәк, Туймазы, Благовар, Дүртөйлө, Бөрө, Бәләбәй, Мишкә райондарында йәшәй. Ғалимдарҙың фекеренсә, ҡаңлы ҡәбиләһе башҡорттары 110 самаһы ауылға нигеҙ һалған.

## Балыҡсы

Ғәли Соҡорой үҙенең "Тәзкирәт лильихвәнсә-әл-әхбәб" тигән хеҙмәтендә: "Риүәйәттәргә ярашлы, бабабыҙ Майҡы Ярашлы бей Сыңғыҙхандың вәзире булып хеҙмәт иткән, әйтеүҙәренсә, уның Ҡаратабын, Байҡы, Балыҡсы атлы улдары булған. Бей һәр улына белем биргән, сәйәхәттәргә һәм походтарға эйәртеп алып йөрөгән", - тип яҙа. "Башҡорттарҙың тарихы"нда Майҡы бейҙең Ирәкте, Балыҡсы һәм Байҡы ырыуҙарының бабаһы булыуы хаҡында әйтелә.

Балыҡсы башҡорт ырыуы тарихы Ҡытайҙы яулап, дәүләткә үҙенең атамаһын биргән ҡатайҙар (ҡидандар), Майҡы бей уйшындары һәм Урал алды "сирмештәре" тамырҙары менән дә тоташа. Балыҡсыларҙың ата-бабалары Батый ғәскәре сафында көнбайышҡа, Себер һәм Ҡаҙан ханлыҡтарына яу менән барған.

XIII - XIV быуаттарҙа улар Башҡортостандың төньяғына күсенеп, урындағы төрки халыҡтар сирмеш тип атап йөрөткән мариҙарҙы йота. 1622-1664 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында балыҡсылар Күсем хандың бүләре Көсөк ханды яҡлап сығыш яһай. Себер ханы Күсем Батыйҙың ағаһы, Сыңғыҙхандың ейәне булған Шибандың вариҫы һанала. Уның бүләре Көсөк урыҫ йылъяҙмаларында "Башҡорт ханы Көсөк" ("Кучук-хан Башкирский") тип теркәлеп ҡалған.

Балыҡсыларҙың ҙур өлөшө ирәкте ырыуы менән ҡандаш. Ирәктеләр ҡасандыр буласаҡ Балыҡсы улысы территорияһында, Төй йылғаһы буйында көн иткән. Балыҡсыларҙың да, ирәктеләрҙең дә тамырҙары ҡара табындарға барып ялғана. Ә инде ҡайпан, таҙлар, унлар, танып, ыуаныш, елдәк, ҡаҙансы ырыуҙары төньяҡ башҡорттарҙы бергә туплау маҡсатында ирәкте шәжәрәһенә индерелгән.

Балыҡсы - башҡорт этносының ырыуы. Революцияға тиклем Балыҡсы улысы Өфө губернаһының Бөрө өйәҙенә ҡараған. Хәҙерге ваҡытта балыҡсылар Асҡын районында, Ҡариҙел районының Асҡын ауылында йәшәй.

**(Дауамы бар).**

***✓ Уның китаптары мине Өфөгә алып килде. Килеп төшкәс тә үҙем өсөн таныш булмаған хәл-күренештәргә иғтибар иттем. Мине бындағы кешеләрҙең бөтөнләй башҡаса фекер йөрөтөүе, һөйләшеүе аптыратты.***



**Гәзиттең 2008 йылдағы бер һанында (№36, 6 сентябрь) "Туфан яйлап ҡалҡа, унан дингә ҡайтып ҡына ҡотола алырбыҙ" тигән әңгәмәлә Йылайыр районының Ҡәҙерша ауылы аҡһаҡалы Нуретдин Хәсән улы Игебаев халҡыбыҙҙың кешелек донъяһында тотҡан урыны хаҡында шундай һүҙҙәр әйткәйне:**

***"...Ошо һүҙ йәһәтенән башҡорттар Урал төбәгендәге иң рәхмәтле халыҡтыр. Күпме халыҡ вәкилдәрен суҡындырыуҙан, крепостнойлыҡ ҡоллоғона төшөүҙән, аслыҡ-яланғаслыҡтан, ҡырылып бөтөүҙән йолоп ҡалған, үҙебеҙгә һыйҙырған милләт беҙ... ...Минең уйымса, нәҡ ошо көньяҡ-көнсығышта йәшәүсе башҡорттарға башҡорт милләте алдында ғына түгел, барлыҡ мосолман донъяһы, кешелек алдында оло миссия һалынған. Һуңғы ваҡытта күп кенә халыҡтарҙың үҙҙәренең тәүсығанағы итеп ошо төбәкте күрергә тырышыуы ла юҡҡа ғына түгел. Сөнки бында тере саҡтарында уҡ Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешә алған суфыйҙар, әүлиәләр ерләнгән. Был ерҙә йәшәү, ғүмер итеү - өҫтөнлөк түгел, оло яуаплылыҡ. Арҡайым ҡаласығы ла юҡҡа ғына ошонда түгел, юҡҡа ғына "Урал батыр" эпосы ла ошо төбәктә һаҡланып яҙып алынмаған. Әгәр ҙә изге әүлиәләребеҙҙең һөйәктәре һаҡланған ерҙе башҡаларға һатһаҡ, уны ситтәргә мыҫҡыл итергә бирһәк, Аллаһ Тәғәлә быының өсөн беҙҙе ғәфү итмәйәсәк, беҙҙең дә, кешелектең дә һәләкәте ошонан башланасаҡ. Был төбәктең ана шундай әһәмиәткә эйә булғанлығын башҡаларға аңлатыр өсөн иң тәүҙә үҙебеҙгә быны тәрән итеп аңларға һәм инанырға кәрәк. Ә инде инаныуҙың берҙән-бер һәм хаҡ юлы - дин юлы..."***

Нуретдин олатай һуңғы һулышына тиклем ошондай инаныу менән йәшәне: милләтебеҙ һәм динебеҙ өсөн изге ғәмәлдәр атҡарҙы, үҙе йәшәгән төбәк, республика, төбәк-ара кимәлдә дини саралар ойошторғанда гел уртала йөрөнө һәм шундай инаныу менән баҡыйлыҡҡа күсте. Рәхмәтле булып йәшәне. Иншалла, ожмах түрҙәре насип булһын үҙенә!

"Һәр кемдең күңеленә үҙ милләте яҡын, ғәзиз (хатта терпе лә балаһын "йомшағым!" тип иркәләй!), шуға күрә үҙ халҡы хаҡында бындай фекерҙәр әйтеүсене аңларға була..." тип ысҡындырыр берәү. Шуға күрә лә хәҙер инде беҙҙең милләттән булмаған Светлана Марченконың башҡорт халҡы, уның туған теле, Башҡортостан хаҡында әйткән һүҙҙәрен килтерәйек:

*"...Ә хәҙер, зинһар өсөн, үтә иғтибарлы булығыҙ. Лев Гумилев "пассионар этәргес көс" ("пассионарный толчок") төшөнсәһен ҡыйыу рәүештә индерҙе. Беҙ иһә "хронональ этәргес көс" ("хронональный толчок") төшөнсәһен индерәбеҙ. Ул нимәне аңлата һуң? Донъяның тулыһынса һәм бөтөнләй алмашыныуы. Алмашыныу шул тиклем тиҙ бара, хатта донъя уны һиҙмәйәсәк. Кешелек был процестың булғанлығын кешеләрҙең фекерләүенә ҡарап ҡына билдәләйәсәк. Беҙ үҙ тарихыбыҙҙа бындай хәл-күренештәрҙе кисерҙек тә инде. XIII быуатта төп суперэтнос Литва территорияһында формалашҡан. Хәҙер ул Башҡортостан ерендә барлыҡҡа килә. Башҡортостан өсөн ниңә мөһим был хәл? Хәҙерге ваҡытта литва теле диалектынан башҡорт теленә тауыш йышлығы күсеү процесы бара. Шуға күрә, башҡорт милләте тиҙҙән ҙур үҫеш кисерәсәк. Башҡорт халҡы биләгән ерҙәр ҙә сәскә атасаҡ... Башҡорт телендә тәбиғәттең тамаҡ өндәре бар, шуға күрә ул тәбиғәт менән үҙ-ара мөнәсәбәтте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк..."*

Хәҙер инде Нуретдин олатай Игебаев менән Светлана Марченконың әйткән һүҙҙәрен йәнәш ҡуйып ҡарайыҡ. Уларҙың тәүгеһе дәлилдәрен дин, Аллаһы Тәғәлә менән бәйләп килтерһә, икенсеһе башҡорт теле үҙенсәлеген төп дәлил итеп килтерә. Тәү ҡарамаҡҡа, бында төрлө төшөнсәләр хаҡында һүҙ барған һымаҡ. Бында ошо ике сығанаҡты бәйләүсе өсөнсө дәлил талап ителгәне көн кеүек асыҡ.

Бар ундай сығанаҡ. Күптән түгел Өфөлә боронғо мәҙәниәттәрҙе һәм традицияларҙы, цивилизацияларҙы өйрәнеүсе, даосизм алхимияһы буйынса 50-нән ашыу китап авторы, танылған ғалим Олег Чернэ булып китте. Ул 180-дән ашыу илдәрҙә булған. АҠШ-тың Чикаго университеты уны ДНК-ны өйрәнеү буйынса яҙған хеҙмәттәре өсөн Нобель премияһына тәҡдим итергә әҙерләнә. Өфөлә Олег Михайлович, һәр минуты ике йыл алдан уҡ көн тәртибенә яҙылып ҡуйылыуға ҡарамаҫтан, бер нисә семинар үткәрҙе, медицина университетында лекция һөйләне, Башҡортостан "Юлдаш" телевидениеһының "Сәләм" тапшырыуында сығыш яһаны һәм бер төркөм журналистар менән осрашырға ваҡыт тапты. Түбәндә уның әңгәмәһенең бер өлөшөн килтерәбеҙ:

# АЛТЫНСЫ

## ҡурай, ҡымыҙ,



(Уңдан икенсе: О. Чернэ)

### Үҙ-үҙемә юл

Яҙмышым үтә ябай. Ҡыйыҡтан ҡолап төшөүем арҡаһында һаулығымды юғалтыуым үҙ-үҙем менән көрәшеү ихтыяжын барлыҡҡа килтерҙе. Юғары техник белем алдым. Медицина буйынса тулы булмаған юғары белемем бар, иң мөһиме, мин унда биохимияны өйрәндем. Һаулығымды нығытыу, үҙемде камиллаштырыу маҡсатында Ҡытайҙа медицина институтында уҡыным. Рухи етәксемдән аңымды бер урынға туплап, донъяға диҡҡәт менән ҡарарға өйрәндем. Был саҡта социумда йәшәй алмаҫымды аңланым. Шуға күрә, иң тәүҙә фатирға бикләндем. Атайым самбо буйынса Рәсәй чемпионы ине, миңә ошо юл менән китергә физик көсһөҙлөгөм ҡамасауланы. Каратэ менән шөғөлләнеп, анһатыраҡ юл һайланым. Аҙаҡ тотош ил каратэ менән мауығып, үҫмерҙәр тәртипһеҙ рәүештә һикерешә башлағас, уның да ҡыҙығы бөттө. Социумдан дәрүиш булып китергә ҡарар иттем. Тәүге "тәҙрә" асылыу менән ҡуҙғалдым. Иң тәүҙә Ҡытайға барып рухи уҡытыусыларымды таптым. Ундағы тауҙарҙа оҙаҡ ваҡыт яңғыҙ аскет булып йәшәнем. Аҙаҡ аңымды бер урынға туплай алмаһам, оҙаҡ йәшәй алмаясағымды төшөндөм. Сөнки ул саҡта үҙемдең тереме-юҡмы икәнлегемде лә аңларлыҡ хәлдә түгел инем.

43-45 йәшемә генә кире социумға әйләнеп ҡайта алдым. Уға тиклем бер нисә урында, шул иҫәптән Башҡортостанда булдым. Ул саҡта совет осоро ахырында популяр һаналған Америка ғалимы һәм яҙыусыһы, антрополог, этнолог Карлос Кастанеда менән мауыҡтым. Уның китаптары мине Өфөгә алып килде, мине бында ҡунаҡҡа саҡырҙылар. Килеп төшкәс тә үҙем өсөн таныш булмаған хәл-күренештәргә иғтибар иттем. Мине бындағы кешеләрҙең бөтөнләй башҡаса фекер йөрөтөүе, һөйләшеүе аптыратты, хатта күңелемдә быға ҡаршы протест тойғоһо барлыҡҡа килде. Һуңынан ғына аңланым: мин эҙләгәнемде тапҡанмын икән. Һәр төбәк киңлек, ғаләм менән үҙенсә мөғәмәлә формаһын төҙөй.

Ул саҡта Өфө һәм уның тирәһендә хәҙерге кеүек төҙөлөштәр юҡ ине әле. Аэропорттан ҡалаға тиклем барғанда үҙемде сүллектә итеп тойҙом. Гүйә, виртуаль донъяға барып эләктем. Аңлайышһыҙ монарға сорналдым. Артабан ошо күренештең асылын өйрәнергә тотондом. Иң тәүҙә мин бында киңлектең (пространство) һулыш алғанын аңланым. Киңлек менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡора белеү ҙә мөһим. Һин уға нимә бирәһең, ул да һиңә шуның менән яуап ҡайтара. Джунгли шамандары, мәҫәлән, киңлек менән мөнәсәбәткә ингәндә уны тере итеп тоя. Мөнәсәбәттәр тоҙағына инмәҫ өсөн мин, мәҫәлән, тәүге ун биш йылда үҙ-үҙем менән көрәштем, һуңынан үҙемдә көс туплай башланым. Хатта үҙемде аслыҡтан азат итер өсөн оҙаҡ ваҡыт ашамай ҙа тора алам. Күп осраҡта мамыҡ һымаҡ осоп китмәҫ өсөн генә туҡланам. Әлеге ваҡытта тәүлегенә бер тапҡыр кис нимәләр ашайым. Был асығыуҙың файҙаһы тураһындағы фәнгә ҡарамай, үҙ-үҙемә табан барған юл мине шуға алып килде. Бөгөн шундай йәшәү рәүешен һайлаған йөҙҙәрсә шәкертем бар.

Һәр бер эштә иң ҡурҡынысы - ҡабаланыу һәм көтөү. Нимәнелер көтөргә ярамай, ә нимәләр эшләргә кәрәк. Беҙ һәр ваҡыт үткәнгә ҡарай башлайбыҙ һәм киләсәкте көтәбеҙ, шул уҡ ваҡытта хәҙерге менән йәшәмәйбеҙ. Ә инде киләсәк килеп еткәс, уны лайыҡлы итеп йәшәй алмайбыҙ, сөнки беҙ хәҙерге менән йәшәргә өйрәнмәгәнбеҙ. Артабан шул киләсәктә беҙ артабанғы киләсәкте көтә башлайбыҙ. Минең өсөн ял, күңел асыу тигән төшөнсәләр юҡ. Футбол ҡарағанда, мәҫәлән, мин уйынсыларҙы үҙенсәлекле гендары булған һирәк осрай торған кешеләр булараҡ өйрәнәм.

### Ҡурай һәм ҡымыҙ ҡөҙрәте

Башҡортостанға тәүге тапҡыр килеүемә 25 йыл үтеп тә киткән. Тәүге килгәнемдән алып бында бик күп үҙгәрештәр күҙәтелә. Үҫеш бында дауам итә. Әле бында психологик циркуляция етешмәй, быының өсөн яҡшы юлдар, күперҙәр кәрәк буласаҡ. Психологик арыу юҡҡа сығырға тейеш. Әгәр ҙә ниндәйҙер ситуация килеп сыға икән, беҙ уны иң тәүҙә ҡабул итергә, шунан һуң ғына унан сығыу юлын эҙләргә тейешбеҙ. Ә инде ситуацияны ҡабул итмәйенсә тороп, күпте теләй башлаһаң, бер нә-

***✓ Башҡорт - ул этнос ҡына түгел, ул нур бөркөүсе кеше, сифат. Башҡорт кешеһе артынан нур эйәрә. Шуға күрә лә Башҡортостанда йәшәүсе һәр кем башҡорт.***

# ИНТЕГРАЛ ҺӘМ...

## башҡорт теле тураһында

мә лә килеп сыҡмай. Аҡса беҙгә тышҡы ихтыяжыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн түгел, ә рухи көсөбөҙҙө арттырыу өсөн генә кәрәк.

Башҡортостанға мин ике позициянан сығып иғтибар иттем. Тәүгеһе - ҡурай, икенсеһе - ҡымыҙ. Тәүге тапҡыр ҡымыҙҙы Ҡаҙағстанда тәмләп ҡараным. Башҡорт ҡымыҙы бөтөнләй икенсе төрлө, сөнки уны яһау шарттары башҡа. Икенсенән, бындағы ер киңлек, ғаләм энергияһы менән ныҡ туҡлана. Ҡымыҙҙы тәмләп, шул киңлектең көсөн аңланым.

Ул саҡта "Алхимия" журналы сығара инем. **Боронғо халыҡтарҙың мәҙәниәтен, боронғо цивилизацияларҙы өйрәнгән кеше булараҡ, Роберт Юлдашевты таптым. Уның ҡурай моңон тыңлап, журнал өсөн интервью алдым. Роберт Юлдашевтың ҡурай моңон тыңлағанда мин ваҡытты, үҙемдең ниндәй дәүерҙә йәшәгәнлегемде онотам, үҙемде сикһеҙ киңлектә йөҙгән азат кеше итеп тоям.**

Һәр халыҡ ниндәйҙер маҡсат менән барлыҡҡа килә. Һәр этностың тәүтормош һәм унан һуңғы формалашыу осоро була. Тәүге осорҙа яҙыу булмаған, әммә кешеләр музыка ҡоралында уйнап, үҙ-ара аралашҡан. Музыка һүҙҙәргә ҡарағанда тиҙ ваҡыт эсендә бер кешенең уй-кисерештәрен, аҡылын башҡаларға еткерергә һәләтле. Ошонан сығып ҡарағанда боронғо башҡорт өсөн ҡурайҙың ниндәй әһәмиәткә эйә булғанлығын аңлауы ҡыйын түгел.

### Башҡорт теле

Ҡурайҙың кешегә йән өрөрлөк ҡөҙрәте барлығын аңлау менән бер рәттән, мин башҡорттарҙың нисек һөйләшеүенә иғтибар иттем. Башҡорт кешеһе ҡурай уйнағанда нисек итеп һулыш ала, нисек итеп һулышын сығармай тороп, шунан яйлап сығара, һөйләшкәндә лә шулай итә. Һуңынан тағы ла шуға иғтибар иттем: Башҡортостанда йәшәгән һәр кем, милләтенә ҡарамайынса, башҡорттар кеүек тын ала. Шуға күрә улар үҙҙәрен башҡа милләт вәкилдәре тип атаһа ла, улар ҙа шул уҡ башҡорт. Мин дә бында саҡта үҙемде башҡорт тип иҫәпләйем. Быға тиклем үҙемә аңлайышһыҙ булған нәмәне инҡар итә торғайным. Хәҙер улай итмәйем: мин ситтән күҙәтергә, өйрәнергә тотондом.

Ысынын әйткәндә, башҡорттар үҙенең теләндә, тәбиғәтендә, музыкаһында нимәнеләр һаҡлай. Ул киләсәкте әҙерләү өсөн контейнерҙы хәтерләтә. Башҡорттар нимәнеләр көтә. Яңыраҡ Сирияла ваҡиғалар башланғас, мин ундағы ваҡиғаларҙы икенсе юҫыҡта аңланым. Ул Рим империяһында күҙәтелгән ҡыйратыу өсөн ҡыйратыуға ҡоролған глобаль ваҡиғаларҙы хәтерләтә. Римляндар был саҡта ниндәйҙер гипнозға бирелгәндер тип иҫәпләйем, тап шуның кеүек аңға һыймаҫлыҡ ҡанлы ваҡиғалар барған Сирияға барыһы ла ынтыла. Гүйә, киңлектең ундағы халыҡтың мейеһен һүндергән кеүек күрҙем. Мин бында молекуляр бәйләнеш боҙолған киңлекте, ғаләмде күрәм. ДНК-ның интеграл яландарын күҙ алдына килтереп ҡараһаң, ДНК 12 сылбырҙан тора. Хәҙерге ваҡытта күп кенә кешеләрҙең ДНК яландары боҙолған, сөнки киңлек ДНК-һында уҡ проблемалар барлыҡҡа килгән. Мин иһә молекуляр кимәлдә 6-сы интеграл яландың боҙолғанын күрҙем. Был яландың асҡысы Башҡортостанда. Шуға күрә мин үҙемдең коллегаларыма йыл ярым элек үк Башҡортостан өҫтөндәге интеграл яланды ремонтлау зарурлығы хаҡында һөйләй башланым. Әгәр ҙә быны эшләмәһәк, барыбыҙға ла бәлә киләсәк. Башҡортостан был йәһәттән Рәсәй өсөн генә түгел, барлыҡ донъя өсөн дә мөһим. Мин ҡыҙыҡлы кешеләр, 11-се, 12-се интеграл ялан вәкилдәре менән осраштым. Мин уларға: "Әйҙәгеҙ, Башҡортостан яланын ремонтлайыҡ..." - тием. Бер йылда ғына бында донъя кимәлендә әллә күпме ваҡиғалар булып үтте. Беҙ ремонт эшенә тотондоҡ. Бер мәл был ерҙән сыҡҡан нур яҡтылығы донъяға тарала башланы.

Күптәр быны эзотерикаға тиңләр. Минең өсөн ул эзотерика түгел, ә физика. Мәҫәлән, минең коллегаларым Ирәмәл тауында нур күрә. Улар башҡалар күрмәгәнде күрә ала. Башҡортостанда ундай урындар бик күп. Минең ҡарамаҡҡа, Шүлгәнташта Башҡортостандың киләсәктәге тормошо хаҡында мәғлүмәт ята. Учалы районының Әүешкүл тауындағы әүлиә ҡәберендә лә нур күренә. Бындай урындар Башҡортостанда бик күп һанда. Уларҙы өйрәнергә һәм аяҡҡа баҫтырырға, тәртипкә һалырға кәрәк. Хәҙерге ваҡытта йөҙләгән кеше энергетик планда был урындарҙы рәткә килтереү өҫтөндә хеҙмәт итә. Улар ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшеүе булды, Сириялағы ваҡиғалар ыңғай юҫыҡ алды. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, Башҡортостан киңлегендәге энергетик хәл-торош Ер шарының башҡа урындарында ошо рәүешле сағылыш ҡына таба. Ни өсөн тигәндә, ДНК яланының Башҡортостан өҫтөндәге өлөшө зарарланғанға күрә, циркуляция эшләмәй.

Һәр бер этностың юғары аң донъяһына сыға торған киңлектәге юлы була. Мәҫәлән, фарсылар унда Арҡайым аша сыҡҡан. Уларҙың вариҫтары - башҡорттар. Суфыйсылыҡ ағымын да башҡорттар барлыҡҡа килтергән.

Башҡортостанда тыуған бала энергетик планда үҙенә файл ала. Һәр кешегә тыуған сағында ике: атай һәм әсәй булыу функцияһы бирелә. Өсөнсө функция рухиәт үҫешен тәшкил итә. Әгәр ҙә өсөнсө функция үҫтерелмәһә, ул бер ҡайҙа ла китмәй, ябыла. Уны үҫтереү өсөн ҡурай менән ҡымыҙҙы файҙаланырға була.

Башҡортто мин һәр көнөн һуңғы көнө итеп йәшәүсе мәмлүк итеп күҙ алдына килтерәм. Грузияла ла мәмлүктәр ҡануны буйынса йәшәүсе бер халыҡ бар. Шуға күрә, минең аңлауымда башҡорт -ул камил кеше тигәнде аңлата. Башҡорттар киләсәктә нимәнелер һаҡлар өсөн үҙҙәрендә шундайын сифат тупланмышын барлыҡҡа килтергән халыҡ. Кока-кола эсеү менән ҡымыҙ эсеү араһында ниндәй айырма бар тип уйлайһығыҙ? Башҡорт кешеһе быны бик яҡшы белә. Ни өсөн тигәндә, кока-кола эскән кеше үҙен эске яҡтан емерә. Ҡымыҙ, киреһенсә, башҡортто энергетик яҡтан нығыта ғына.

### Ҡурай уйнаған кеше

Урманға аяҡ баҫыусы кеше үҙенең энергетик яҡтан көслө урынға килеүен аңларға тейеш. Ни өсөн тигәндә, үҫемлектәр беҙгә ҡарағанда күпкә көслөрәк. Уларға кислород кәрәкмәй, сөнки углекислый газ ярҙамында йәшәйҙәр. Үҫемлектәрҙә энергия туҡтауһыҙ регенерация үтә. Беҙ иһә кислородты яндырабыҙ ғына. Мин тынлы музыка ҡоралдары яҡлы, сөнки улар аҙға ғына булһа ла һулыш алыуҙы сикләй. Мәҫәлән, ҡурайсы башҡаларға ҡарағанда аҙыраҡ һулыш ала. Бында инде бөтөнләй башҡа төрлө биохимия. Был йәһәттән ҡарағанда ла, ҡурай уникаль күренеш.

Башҡорт теленә килгәндә лә шулай. Ундағы үҙенсәлекте өндәрҙе әйтеү өсөн бөтөнләй башҡаса һулыш алырға кәрәк. Башҡортостанда йәшәүсе урыҫтар, мәҫәлән, башҡорт теленең ҡанундары буйынса һөйләшә. Быға мин таң ҡалдым. Сөнки урыҫтар башҡорттоң һулыш алыуын тәбиғи рәүештә үҙҙәренә ҡабул иткән. Икенсе төрлө әйткәндә, башҡорттоң һулыш алыуына көйләнгән атмосфералағы тирбәлеш урыҫтарға ла күскән. Улар ошо ерҙә йәшәгәс, бынан бер нисек тә азат була алмай. Икенсе бер мөһим мәсьәлә: ниндәйҙер телде файҙаланыр өсөн ул телдә фекер йөрөтөргә өйрәнергә кәрәк. Әгәр ҙә башҡорт кешеһе урыҫса фекер йөрөтөп, башҡортса һөйләшһә, был башҡорт теле түгел.

Башҡорт - ул этнос ҡына түгел, ул нур бөркөүсе кеше, сифат. Башҡорт кешеһе артынан нур эйәрә. Шуға күрә лә Башҡортостанда йәшәүсе һәр кем башҡорт. Кемдер быны аңламай һәм танымай икән, бының өсөн асыуланырға ярамай. Сөнки асыу тойғоһо аңламағандарҙы, киреһенсә, тоҡандыра.

### Дин һәм толерантлыҡ

Мин дини кеше түгел, әммә ниндәйҙер кимәлдә даосизм яҡлы. Аллаһы Тәғәләне геометрия формаһында ҡабул итәм. Тик уны геометрияға таянып аңлата башлаһам, һәр ваҡыт кире реакцияға дусар булам. Икенсе төрлө әйткәндә, мин юл кешеһе. Мин бөтә нәмәне ҡабул итәм һәм һәр нәмәлә файҙа эҙләйем. Рухты физик, молекуляр кимәлдә өйрәндем. Шуға күрә мин уға хыянат итә алмайым. Сөнки был осраҡта үҙемдең молекуляр тәбиғәтемә хыянат итер инем. Һәр бер дин - ул кешеләрҙе ниндәйҙер йүнәлешкә көйләү. Донъяла күпме кешеләр төрлө диндәргә бирелә, әммә улар башҡа диндәгеләргә яҡшы ҡараштa түгел. Дини китапта "Яҡыныңды ярат" тип әйтелһә лә, был тойғо бармы? Хатта был йүнәлештәге тәрбиә лә юҡ беҙҙә.

Төрлө диндәр төрлө интеграл яландарға ҡарай. Шуға күрә, 6-сы интеграл яланда йәшәүсе башҡорттар Ислам динен шатланып ҡабул иткән, сөнки Ислам дине үҙе лә 6-сы яланда барлыҡҡа килгән. Хәҙер лозунгтар заманы үтте, кешеләрҙең фекерләүен дөрөҫ юлға сығарыу мөһим бөгөн. Кешеләр киңлекте тере итеп тойорға тейеш. Был тәңгәлдә ҡурай тәүге аҙым булыуы мотлаҡ. Башҡорт балалары ҡурайҙа уйнап өйрәнергә бурыслы. Әлбиттә, барыһы ла ҡурайсы булып китмәҫ, әммә һәр бер башҡорт балаһы ҡурайҙы аңларға, яратырға тейеш.

Мин оҙаҡ ваҡыт суфыйсылыҡты өйрәндем. Суфыйсылыҡ - ул йәмғиәттең идеаль йәшәү рәүеше. Суфый киңлектә үҫешеп кенә ҡалмай, уның менән аралашыуҙан үҙенә кинәнес ала. Бының өсөн ҙур рухи көс кәрәк. Ул рухи көс бер ниндәй ҙә һүҙ әйтмәйенсә, нимәнелер башҡаларға еткерә алыу ҡөҙрәте.

Икенсенән, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәре башҡорттоң йола-традицияларын, мәҙәниәтен һәм сәнғәтен, телен, киңлек менән мөнәсәбәтен ихтирам итергә тейеш. Мәскәүҙә Афғанстан илсеһенә Руми премияһын тапшырғанда баш ҡала йәшәүсе егермеләп урыҫ телле афғандар менән аралашырға тура килде. Улар барыһы ла миңә толерантлыҡ хаҡында аңлатырға теләне. Мин уларға: "Мин һиңә толерантлы, мин һиңә толерантлы, тип әйтеү менән генә бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк", - тип яуап бирҙем. Ни өсөн тигәндә, ғәҙәттә, дуҫлыҡ хаҡында һүҙ барған ерҙә ысын дуҫлыҡ булмай, унда йыйылыусылар таралышыу менән дуҫлыҡ ҡына түгел, ихтирам тойғоһо ла юҡҡа сыға. Минеңсә, кешеләрҙең был мәсьәләгә ҡарашын үҙгәртергә кәрәк. Бында лозунгтар кәрәкмәй. Лозунгтар, ғәмәлдә, киреһенсә эшләй.

Мин эзотерик түгел. Шул уҡ ваҡытта Үҙәк телеканал аша үҙем аңлағанды башҡаларға аңлатҡым да килмәй. Үҙемдең уҡыусыларым бар, уларҙы нимәгәлер өйрәтәм. Мәҫәлән, һулыш алыу энергияһы дәресе бирәм уларға. Бында физика һәм медицина хаҡында һүҙ бара. Мин, ғөмүмән, эзотерикаға ҡаршы. Нимә хаҡында һөйләгәнен аңламаған кеше генә эзотерик. Эзотерика кешеләрҙең наҙанлығы, көсһөҙлөгө арҡаһында барлыҡҡа килә.

Әлеге ваҡытта мине ДНК буйынса Нобель премияһына тәҡдим итергә әҙерләйҙәр. Тәҡдим итеү өсөн хатта аҡса ла бүлделәр. Әммә мин быны Америка аша атҡарырға теләмәйем һәм процесты туҡтаттым. Сөнки улар миңә лаборатория тәҡдим итәләр һәм мин унда даими рәүештә эшләргә тейешмен. Бәлки, миңә Башҡортостан ерлегендә эшмәкәрлек итергә кәрәктер, сөнки, күреүебеҙсә, Рәсәйҙең, шулай уҡ бөтөн донъяның киләсәге, именлеге фәҡәт Башҡортостан менән бәйле. Әгәр ҙә лаборатория булһа, мин проблеманы молекуляр кимәлдә аңлата алыр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП:**

**Кемгә нисектер, мин иһә Нуретдин олатай Игебаевтың, Светлана Марченконың һәм Олег Чернэның дәлилдәренән һуң уларҙа, асылда, бер үк нәмә хаҡында һүҙ барғанлығын аңланым. Һығымтаны һәр кем үҙе яһаһын, тием. Шулай ҙа Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Станислав Говорухиндың "Рәсәй" каналында йәш таланттар конкурсында Ләйсән Золотарева хаҡында әйткән һүҙҙәрен тағы бер тапҡыр иҫкә алғы килә: "Шул тиклем ярһыулыҡ был ҡыҙҙа, шул тиклем энергия - ул хатта хәрби ядро зарядына етер ине..." Әлбиттә, халыҡ артисы был һүҙҙәрҙе уйнап әйтте, әммә сәпкә тейҙе...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# СУРЫТЫП АЛАЙЫҠ ӘЛЕ!

## Йәғни халҡыбыҙҙың булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, аҙ ғына шаштырыу өҫтәп һөйләү ғәҙәтен иҫкә төшөрөп алайыҡ

**Сурытып һөйләү шаян телмәргә биҙәк өҫтәүҙән ғибәрәт. Һүҙ барған төп ваҡиға булған хәлдәргә нигеҙләнә һәм кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән йөпләй барыла. Башлап һөйләүсе әңгәмә барышында һәр саҡ йөпләүсенең баш һелкеп, эйәк ҡағып йәки дәртләндергес һүҙҙәр менән хуплап ултырыуына мохтаж була. Ундай кеше, ғәҙәттә, ҡатыны йәки был ваҡиғаның шаһиты, йә булмаһа башҡа кешеләрҙән ишеткән була. Сурытыу - алдау түгел, ул булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, сағыштырыуҙар, аҙ ғына шаштырып ебәреүҙәр өҫтәп һөйләү. Ул ғына ла түгел, оҫта һөйләүсе тыңлаусыларҙың кәйефен, тыңлай белеү һәләтен һәм был әңгәмәлә ҡатнашыу-ҡатнашмау кимәлен дә иҫәпкә ала. Төп һөйләүсе өсөн барыһының да тыңлап, ихлас көлөп, ҡатнашып ултырыуы, уның сурытыу оҫталығына телдән түгел, ә ҡарашы, ым-ишараһы менән баһа биреп ултырыуы ла мөһим. Әгәр арала берәйһе ваҡиғаға ҡарата битараф йәки иғтибарһыҙ булһа, оҫта һөйләүсе әңгәмәһенә уның үҙен дә ҡушып ебәрә. Әңгәмәһендәге төп геройҙы уға оҡшата йәки уның берәй туғанының был ваҡиғала ҡатнашыуын, йә булмаһа ундағы берәй геройҙы яҡшы белеүен телгә алып, йоҡомһорап ойоп ултырған тыңлаусыны уятып ебәрә. Хикәйәләү барышында кемдеңдер һүҙ ҡыҫтырып ебәреүе йәки сурытыуҙы көсәйтеү маҡсатында әңгәмә һөйләп алыуы, һорау биреүе, асыҡлыҡ индереүҙе, аңлатыуҙы һорауы ғәйепкә алынмай. Киреһенсә, тыңлаусының әүҙемлеген күрһәтә. Әңгәмәсе бындай өҫтәмәләргә тулы ирек бирә һәм оҫта ғына итеп үреп ала ла китә. Әйткәндәй, сурытыусы бер ваҡытта ла үҙенә баһа ҡотмәй. Төп баһа ул һөйләгән ваҡиғаға ҡарата булырға тейеш. Ваҡиғаға, ундағы геройҙарға ҡарата ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәт уятыу - сурытыусының маҡсаты. Шуныһы әһәмиәтле: сурытыусы кемгәләр ғәйеп ташламаҫ, кемделер уңайһыҙ хәлдә ҡалдырмаҫ өсөн, ғәйепкә алыныр ваҡиғаның төп геройын Мин йәки Үҙем тип бәйән итә. Тыңлап ултырған саҡта быны аңлайһың, әммә хикәйәләү шул тиклем оҫта ҡорола, төп герой сүрәтендә тап уның үҙен күҙ алдына килтерәһең.**

**Ҡоро һүҙ - ҡуңалтаҡ итек, тигәндәр. Ейәнсура, Хәйбулла райондарында, Ырымбур өлкәһенең Сурай ауылында, Медногорск ҡалаһында, Һамар өлкәһенән Өфөгә күсеп килеп йәшәүсе үҫәргәндәр менән бергә булған саҡта ишеткән сурытыуҙарҙы тәҡдим итәм. Әйтергә кәрәк, минең сурытыуҙы башҡа ырыу вәкилдәренән ни өсөндөр ишеткәнем булманы.**

## МАЛАЙҘАР ИҪӘН ҠАЛДЫ, БЫЛАЙ БУЛҒАС...

Нурулла ағай менән Шәмсениса еңгәй тормоштан артта ҡалмаҫ өсөнмө, Аҡъярҙа ҙур ерҙә эшләгән улдарының күпме генә әйтмәүенә ҡарамаҫтан, бер нисә мәртәбә - борон-борондан йоҡлап йөрөгән урындыҡтарын заманса тимер карауатҡа алмаштырған. Кем уйлап сығарғандыр инде панцир тигән уңайһыҙ нәмәне, тегенең тимер селтәре бушап, урта тирәһе һәленгәндән-һәленә бара икән. Йоҡларға ятыуын уңайын килтереп, яйын табып яталар, ти, тик иртән тороп китеүҙәре ауырлаша бара икән. Бер көн шулай мал биклән, тамаҡ туйҙырып, инде генә рәтләп ятып йоҡлап киттек тигәндә, тышта ҡапыл шартлау тауышы ишетелә.

- Ай, әттәгенәһе, әбей, инде генә һинең ҡәҙереңде белеп, йүнләп йәшәй башланым тигәндә... - тип, күҙен ыуалай-ыуалай һиҫкәнеп килеп уяна ти Нурулла ҡарт.

(Артабан курсив менән төп сурытыусыға ҡушылып китеүселәрҙең өҫтәмәһе бирелә).

*- Беҙҙең яҡта бер-береһенә әбей, бабай, тип өндәшәләр бит. Уныһын беләһегеҙҙер.*

- Нимә булды, бабай? - тигән әбейе, арып-талып килеп ятҡанғалыр, был тауышты ишетмәй ҡалған була.

*- Шәмсениса инәй ҡолаҡҡа катыраҡ булып ҡалды шул, улының ҡайғыһынан. Улдары ни, йәшләй генә һәләк булды бит Афғанда. Өйләнеп кенә киткәйне, ҡатыны бер бала менән ғүмерлеккә яңғыҙ ҡалды ла ҡуйҙы.*

*- Нурулла олатай менән Шәмсениса инәй килендәрен ташламаны, айырым йорт һалып бирәп сығарҙылар ҙа ошоғаса ташламайҙар.*

*- Улының ярсығы бит бала.*

- Ишетмәнеңме ни, бомба шартланы бит. Һуғыш башланды инде, һуғыш, әбей... Төштөк карауат аҫтына. Исмаһам, тәҙрә тапҡырынан алыҫыраҡ булайыҡ. Төн сыҡҡансы иҫән-имен ҡалһаҡ, иртәгә мөгәрәптә урын әтмәлләрмен, - тигән Нурулла ҡарт, тауышы нескәреп, ҡалтыранып китте, ти.

Үҙе, әбейен тынысландыра-тынысландыра, карауаттан төшмәксе була икән. Карауаттың панциры аҫҡа һәленгән дә, йүнләп баҫа алмай ҙа ҡуя ти был. Бер аяғын күтәрһә, икенсеһен тартып ала алмай, икенсеһен күтәрһә, быныһы ҡалҡмай ыҙалана икән. Әбейе лә түмәрлеге сыға ти карауат уртаһында.

- Әйтәм мин һиңә, сит яҡтан үҙем ятайым, тип, - һуҡыранып та алған була ти әбейенә.

- Ҡасан күргәнең бар бисәнең ирҙән алда түргә барып ятҡаның?

- Уныһы шулай ҙа бит... Урындыҡҡа етәме ни, оҙонораҡ та, иркенерәк тә ине. Ҡайһы яғынан теләһәң, шунан барып ятыла ине. Әллә ни шуны алмаштыртты бит теге шилбма малай. - Тағы әлеккенән дә ямайыраҡ шартлау ишетелә. - Уй, әбей, тағы аттылар бит. Әйҙә, икәүләшеп ҡолап төшәйек тә ҡуяйыҡ. Юрған менән ҡуша төшһәк, ауыртынмабыҙ әле.

Нурулла ҡарт әбейен карауаттан ҡолата тәртөп төшөрә лә артынса үк үҙе тәгәрәй.

- Тәгәрәп төшмәй торһондар әле... Дыуарама килеп, береһе юрғанға уралып, икенсеһе панцир төбөнә төшөп, зыу килгән саҡта, бабайы, былай булмай, әбей, карауатыбыҙ тәҙрәгә нык яҡын, ауылға инеп атһалар, бөттөк, үҙ йәнебеҙҙе үҙебеҙ үлем аҫтына ҡуйбыҙ бит, - тигән, әсенеп.



- Ни эшләйек һуң, бабай? Команда бир атыу, бабай, команда бир, - тигән була ти әбейе.

- Булды атыу, әбей, дөрөҫ әйтәһең. Әс, тигәндә һин дә, мин дә бер юлы ҡалҡынабыҙ ҙа ҡолайбыҙ ҙа төшәбеҙ. - Шулайтып төшкәндәр ти улар.

- Эйе шул. - Шунан бабай: "Инә һал, әбей, карауат аҫтына. Тегеләй-былай була ҡалһа, мин алдан сығып баҫырмын", - тип, әбейен йәнәтләй башлаған.

- Һаман үҙен уйлай. Һин сығып ҡасырһың да ул. Мин ни эшләрмен?

- Сығып баҫырмын тейем. Һаҡ ҡолаҡ. Ин, инә һал карауат аҫтына, быҙмырлама инде.

- Яулығым ҡайҙа һуң минең? - тип һаман яулығын эҙләй ти әбейе.

- Карауат аҫтында һинe кем күрә? - тип әрләй ти бабайы.

- Күреүҙәме ни эш? Иҙән йыуғанда ла тимер селтәренә сәсем уралып бер булам. Тағы шулайтып сыға алмай ятмайым тейем.- Әбей яулығын эҙләгән саҡта, ҡулы ҡуйы бер нәмәне һәрмәп ала. - Уй, бабай, бында ҡан да ул. Ҡараңғы-юкка ауыртканын да һиҙмәгәнбеҙ инде. Кемебеҙҙәлер пуля әләккән бит.

- Бомбаның пуляһы булалыр шул. Ошо бисәләрҙе... Әйҙә, әләйһәң, иплән кенә шыуып сығайыҡ та бер-беребеҙҙе һыйпап ҡарайыҡ. Таң атҡансы күп ҡан юғалтыуҙан үлеп ҡуймайыҡ. Ай, әттәгенәһе, әбей, яңы ғына ҡәҙереңде белеп, ипкә килеп, тәртә араһына инеп йәшәй башлағайным. Әллә ни йәш саҡта бисә ҡәҙере белеммәй бит. Аңлап һаман шул ситкә ҡарала... Ғәҙәтеңә төкөрәйем...

Бабай, уҙалдына һөйләнә-һөйләнә, ҡараңғы бүлмә иҙәнендә ятып һәрмәнә торғас, яралы урынын таба. Ҡолаҡ тирәһендә була яраһы. Ҡулы ҡанға мансыла.

- Уй, әбейгенәм, ҡолаҡты еффәрғән бит был фашист аламаһы. Яран гөләндә ынтылып ҡына ал да тупрағын усыма һал әле, тупраҡ ябайым ярағa.

- Ҡайҙан килеп инде икән ул бомбаһы? Уй, бабай, нык ауыртамы?

- Шырпы сыйып, усым эсендә генә утын ҡаплап абайлайыҡ әле, ҙурмы икән яраһы, былай ҡолаҡ тирәһендә ауыртыу бик нык һиҙелмәй ҙә ул, - ти икән бабай.

*- Шулай тип тынысландыра инде үҙен.*

Нурулла ҡарт тотош тән тирәһен һыйпай торғас, бармаҡ битенә төйөрөм бер нәмә әләгә.

- Әбей, ҡан апаруҡ аҡҡан да туҡтаған, ахыры. Төйөрөмләнеп, уҡмаша башлаған шикелле. Әллә ут тоҡандырып маташмайбыҙмы? Фашистар утты күреп, был яҡҡа ынғайламаҫтармы тием дә.

- Уныһы шулай, бабай. Әйҙә, түҙгәс, түҙәйек инде. Йәйге төн ҡыҫҡа була торған, таң атканын көтәйек, - тигән дә әбей карауат аҫтына ҡабат инеп ятҡан ти.

- Эйе шул. Был фашистар ҡыштан ҡурҡа бит ул. Һуғышты гел йылы көндәрҙә, төн ҡыҫҡаһында башлайҙар. Малайҙар йәлке, әбей, малайҙар йәлке. Тегеһеһе башын һалды юҡ өсөн. Афған һуғышының мәғәнәһен һаман аңлап етмәйем. Быныһы ла берәй иҫәрлектер әле, моғайын. Үҙем буйға ҡайтышыраҡ булһам да тирәк һымаҡ малайҙар үҫтерҙек тә бит... - бошоноп ҡына һөйләнеп ята икән бабай.

- Ни эшләп ҡапыл булды һуң был? Улай-былай бер нимә лә ишетелмәгәйне бит, - тип һаман аптырай ти әбей.

- Хәҙерге заман техникаһы ни. Күҙ асып йомған арала килде лә етте инде. Ил сигендәгеләр һиҙмәй ҙә ҡалғандарҙыр, әбей...

Бабай бәхилләшеү һүҙҙәре әйтергәме, йәшлек хаталары өсөн әбейенән ғәфү үтенергәме, тип күңеле үтә нескәреп китеп, хатта назлы итеп өндәшә "Әбей" тип, уныһы ла шундай уҡ наҙ менән: "Әү, бабай",- тигән була, ти.

Бабайы тағы өндәшмәй, һаман яраларын ҡарап ятҡанда, ҡулы ауып ятҡан банканы һәрмәп ала.

- Аһ, әбей, вареньебыҙ шартлаған бит.

- Ҡуй инде, ҡышҡылыҡҡа тип ҡайнатып ҡуйғайным. Күҙ алдында торһа, ашала ла бөтөлә, тип, карауат аҫтына индереп ултыртҡайным шул.

- Ғүмер буйы эшкинмәнең инде. Шунан нисек... - Нурулла ҡарт йәш сағындағы мутлыҡтарының сәбәбен тағы әбейенә һылтамаҡсы була ла, тик шунда уҡ, ҡалған ғүмерен арыу ғына, әбейенең ҡәҙерен белеп кенә үткәрергә, тип, үҙенә һүҙ биргәне иҫенә төшөп, һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрә. - Вареньеле булғанмы туймылыҡ. Баш һау ҡалһа, ас булмабыҙ ул... Туҡта, әбей, шул варенье шартлағанын ишетеп уянғанын индә, әләйһә. Бомба түгел былай булғас. Былай-алай ҡурҡыуға һалмаһынмы... Әбей, һау ҡалдыҡ, былай булғас. Уй, әбей, даланыбыҙ бар икән, былай булғас. Малайҙар ҙа иҫән ҡалдылар, былай булғас...

*Әллә дөрөҫ, әллә юҡ, ул әбей менән бабайҙың мәрәкәләре күп ул. Әллә бөтә ҡыҙыҡты улар исеменә бәйләй ҙә ҡуялар инде...*

*- Һин үҙең дә сурытырға оҫтаһын.*

*- Сурытмаһаң, ҡыҙығы булмаы ни ул...*

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

**Бөгөнгө заманда бөтөн донъяла этник костюмдар халыҡтың милли үҙаңын сағылдырыусы бер сағыу өлгө булып тора. Халҡыбыҙҙың традицион архитектураһын, көнкүреш әйберҙәрен тормошобоҙға кире ҡайтарыу ауырыраҡ барһа ла, шөкөр, милли кейемде тергеҙеү йәһәтенән эш әүҙемерәк. Бында республикабыҙҙың һәр районында эшләп килгән ағинәйҙәр ҡорҙарының өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Улар милли күлдәк-камзуллы, селтәр, һаҡал, яғалы, ҡашмаулы булып бөттөләр, тиергә лә була. Улай ғына түгел, ағинәйҙәр хәҙер һәр төбәккә хас милли үҙенсәлекле кейемдәрҙе тергеҙеүгә тотондо. Башҡорт костюмына арналған ошондай сара декабрь башында Мәсетле районында ла үтте. Мәсетлеләр Балаҡатай, Ҡыйғы, Дыуан, Салауат райондары ағинәйҙәрен "Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының милли кейеме" тигән форумға йыйҙы. Сарала республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, фольклорсы Сәрүәр Сурина, башҡорт костюмдары буйынса белгес-модельер Сәрүәр Аслаева, башҡорт һөнәрселек мәктәбен тергеҙеү менән шөғөлләнеүсе энтузиаст Илдус Ҡолһарин һәм башҡа абруйлы ҡунаҡтар ҡатнашты.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМЕБЕҘ ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨ -

## уны барлап, теүәлләп алаһыбыҙ бар








Был төбәк башҡорттарына хас милли кейем быға тиклем иғтибарҙан ситтә ҡала килде. Уҡа менән биҙәлгән еләнь, ҡашмау һәм мәрйен-тәңкәләрҙән яһалған һаҡалдан торған көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының милли кейемен төп башҡорт кейеме тип иҫәпләй килдек. Әммә милли кейемдәребеҙҙең көньяҡ-көнсығыш башҡорттары костюмынан башҡа ла төрҙәре бихисап - ошоно раҫланы ла инде был форум.

"Милли кейемебеҙ - үҙебеҙҙең милли ризыҡтар, милли ғөрөф-ғәҙәттәр менән бер рәттән, йәшәйешебеҙҙең нигеҙе булып тора. Райондарҙа ағинәйҙәр ҡорҙарын ойошторғас та, иң тәүҙә милли кейемебеҙҙе тегеп кейәйек тигән оран ташлағайныҡ. Кейемдәребеҙҙе кейеп, йолаларыбыҙҙы тергеҙгәйнек - йөҙҙәребеҙгә нур ҡунды, сөнки беҙ үҙ асылыбыҙға ҡайттыҡ. Мин ойоштороусы ғына, ҡалған эш үҙегеҙҙән тора. Һандыҡ төптәрендә ятҡан өлгөләргә таянып, үҙебеҙҙең милли кейемдәребеҙҙе үҙебеҙ тергеҙәйек һәм башҡорт таҡыяһы, ҡалпағы, муйсаларын башҡаларға ла күрһәтәйек", - тигәйне үҙенең сығышында республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы. Ҡеүәтләүсеһе табыла ул, иң мөһиме, башлап ебәреү фарыз. Быйыл "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале сиктәрендә уҙған "Һомай" республика башҡорт костюмы байрамына әҙерләнгәндә ошо төбәккә хас милли костюмды тергеҙеү йәһәтенән байтаҡ эш башҡарылған. Шулай ҙа Мәсетле ағинәйҙәренең сәменә тейгәне - йәй көнө Өфөлә уҙған башҡорт милли кейеме фестивалендә халыҡтың уларҙың милли кейемен танымауы булған. "Һеҙ ҡайны райондан тип кенә түгел, һеҙ ниндәй милләт, тип һораусылар булды. Башҡортостандың 54 районы араһында кейеме менән ошо 5 район айырылып тора икән, уны беҙҙән башҡа бер кем дә тергеҙмәйәсәк, тип, ныҡлап тотондоҡ һәм бер йыл эсендә ярайһы уңышҡа өлгәштек", - ти Әбдрәхим ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Сажиҙә Фәйзрахманова. "Төбәгебеҙ үҙенсәлекле биҙәктәре, сигеү өлгөләре менән айырылып тора, хәҙер беҙ ошо байлығыбыҙҙы тергеҙеп, йәш быуынға ҡалдырыу өҫтөндә эшләргә тейешбеҙ. Был форумдың да төп маҡсаты - шул", - тине үҙенең сығышында Мәсетле районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлназ Халиҡ ҡыҙы Ҡадирова ла.

Фольклорсы Сәрүәр Сурина билдәләүенсә, милли костюм өҫтөндә эшләгәндә уның этнографик һәм тарихи ысынбарлыҡҡа тура килеүен күҙәтеү - мотлаҡ шарт. Башҡортостандың был төбәгендә йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар костюмы, тәү ситтә, баш кейеме менән айырылып торған. Көнкүрештә ябай яулыҡтар ҡулланылһа, халыҡ араһында "француз яулығы" булараҡ билдәле яулыҡтарҙы ҡушлап тегеп яһалған ҡушъяулыҡтар байрамса кейемдәр иҫәбенән. Туй яулығы тип тә йөрөтәләр уны. Ҡушъяулыҡ эйәк аҫтынан тәңкәләр баҫылған таҫма - һағалдырыҡ менән нығытылып ҡуя. Ә ҡушъяулыҡтың аҫтынан ҡалпаҡ (ҡалфаҡ) кейгәндәр, дөрөҫөрәге, кейәүгә сыҡҡандан һуң килен ҡалпағы өҫтөнән ҡушъяулыҡ кейә башлаған. Ҡалпаҡтың маңлай өлөшөнә йә тәңкәләр баҫылған, йә уҡа тегелгән, йә мәрйенләп сигелгән. Ошонан сығып, уның атамаһы ла төрлө: мәрйенле ҡалпаҡ, тәңкәле ҡалпаҡ, сикә ҡалпаҡ. "Сикә ҡалпаҡты бер аҙ ауыштырып, ҡыландырыбыраҡ кейәләр. Уларҙың барыһы ла түбәтәй һымаҡ тегелә, тик бик бейек итмәйһең. Ҡәйнәмдең миңә бүләк итеп ҡалдырған ҡалпағын, яулығын, күлдәген һаман кейәм һәм өлгө булараҡ ҡулланым", - ти Венера Яҡупова. Ҡалпаҡтың таҡыя тигән тағы бер атамаһы киң таралған был төбәктә.

Беҙ һаҡал, селтәр, яға тип атарға күнеккән биҙәнеү әйбере иһә был төбәктә тик көмөш тәңкәләрҙән яһалған, аҡыҡ, фирүзә кеүек ҡиммәтле таштар ҙа ҡулланылған. Трапеция формаһындағы ерлеккә эшләнгәне муйса, муйынса тип йөрөтөлә. Был ерлек, ғәҙәттә, ҡара төҫтә була, ти Дыуан-Мәсетле ауылынан Мәүжиҙә Аллаярова. Форум сиктәрендә муйса буйынса оҫталыҡ дәресе үткәреүсе Тәнзилә апай Ғәйнетдинова әйтеүенсә, тәңкәләрҙе бер-береһенә тейеп торорлоҡ итеп, өҫтө-өҫтөнә баҫырға кәрәк. Ғалимдар "түштек" тип йөрөтөлгән биҙәүесте лә атай, уның формаһы ярым түнәрәк һәм уны уҡа һәм таҫмалар менән биҙәйҙәр. Шуныһы ҡыҙыҡ, һуңыраҡ дәүерҙә сауҙа юлы менән үтеп ингән гәрәбә, мәрйендәрҙән теҙелгән муйсаларҙы етешһеҙерәк көн күргән ҡатын-ҡыҙҙар таҡҡан, тиҙәр. "Колхозлашыу осоронда ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың муйсаларын, трактор һатып алабыҙ, тип, йыйып алғандар. Өләсәйем үҙенең муйсаһын ашлы һыуға төшөрөп ебәреп кенә һаҡлап ҡала. Тик һуңынан был турала башҡаларға һөйләй һәм һүҙ артынан һүҙ китеп, уның муйсаһын етәкселәр килеп алып та китә. Бөйөк Ватан һуғышы мәлендә ҡабаттан йыйып алына биҙәүестәр. Шуға ла был төбәктә муйсаларҙы табыуы ауыр", - ти Салауат районы Яңы Ҡаратаулы ауылында тыуып, әлеге көндә Яңы Ахун ауылында йәшәүсе Филүзә Хәснөтдинова. Оҙаҡ йылдар мәктәптә балалар уҡытып, хаҡлы ялға сыҡҡан Филүзә апай милли кейемдәрҙе тергеҙеү өҫтөндә икенсе йыл эшләй.

Тамбурлы сигеүҙе лә башлыса ошо төбәктә тап итә алабыҙ. Ысынында иһә, тамбурлы сигеү милли мәҙәниәтебеҙҙең сағыу бер өлгөһө ул. Төньяҡ-көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙары уның менән йортон ғына түгел, күлдәк, алъяпҡыстарын да биҙәй. Балаҡатай районында 1998 йылда "Тамбур" биҙәү-ғәмәли сәнғәте халыҡ студияһын барлыҡҡа килергән Билән ауылы ҡатын-ҡыҙҙары, тамбурлы сигеүҙең шундай киң таралыу аласағы тураһында хыялланырға ла ҡыймағайныҡ, тиҙәр. Студияның етәксеһе Венера Мәжит ҡыҙы Ғәлиәкбәрова ла был форумдан ҡәнәғәт ҡалыуын белдерҙе. Хәҙер был төбәктә йәйләп һәр ырыу, ауылға хас биҙәктәр өйрәнелә. Әйткәндәй, тамбур сигеүенән тыш, шаҡмаҡлап биҙәкләп сигелгән алъяпҡыстар ҙа осрай, тинеләр күргәҙмәлә ҡатнашыусылар.

Һәр биҙәктең үҙенең мәғәнәһе, тәғәйенләнеше булыуы, милли кейемдә ошо төбәккә генә хас йәшәйеш сағылыуы тураһында Өфө ҡунаҡтары ла, районның "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе, Тыуған яҡты һәм тарихты өйрәнеү музейы директоры Нәзирә Фазылйән ҡыҙы Әхкәмова ла әйтте. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының милли костюмы оҙайлы ваҡыт формалашҡан. Ул бөгөн дә яңынан-яңы биҙәктәр менән байый, тулылана килә. Әммә ниндәй генә дәүерҙә йәшәмәһен, кейемдәребеҙҙең төп үҙенсәлеге шунда - ул халҡыбыҙҙың рухи һәм матди байлығының күрһәткесе. Шуға ла милли кейемдәребеҙ ҡиммәтен юғалтмаһын, нәзәкәтлеген, байлығын һаҡлап ҡалһын ине.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Мәсетлеләрҙең был форумы төньяҡ-көнсығыш башҡорттары кейемен тергеҙеү эшенә ҙур этәргес бирҙе, тиһәк, һис яңылыш булмаҫ. Дыуан районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Рәйсә Бәҙретдинованың хаҡлы билдәләүенсә, үҙ асылыңа ҡайтыу, үҙ тамырҙарыңды юллау һәм ошо байлыҡты балаларыңа тапшырыу теләге һәр кемдең күңелендә йәшәй ул. Тимәк, тиҙҙән тотош республикабыҙҙан йыйылған ҡатын-ҡыҙҙар араһында был төбәктең дә үҙенә генә хас йөҙө һәм төҫө буласаҡ. Башҡалар иһә ошо рәүешле башҡорт кейемен үҙе өсөн тағы ла яңы яҡтан асасаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*✓ Интернет аша аралашыу улар өсөн ысынбарлыҡтағы кеүек үк. Ғалимдар шуға ла үҫмер өсөн интернетта аралашыуҙың мөһимлеген билдәләй һәм уларҙы бынан тыйыу ярамай, ти.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ВИРТУАЛЬ ДУҪ ТА КӘРӘК

■ Португалия белгестәре бөйөрө сирле 2300 кешене тикшереп, улар араһындағы кофеинлы эсемлектәр яратыусыларҙың ниндәй ҙә булһа сәбәп менән үлеү хәүефе 24 процентҡа түбән булыуын асыҡлаған. Ғалимдар әлегә быныҡ сәбәптәрен асыҡлай һәм фәнни нигеҙҙә раҫлай алмаған. Әммә Саутгемптон унисерситетында үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, ҡәһүә бауыр яман шеш хәүефен түбәнәйтә икән. Анығыраҡ әйткәндә, ҡәһүә гепатоцеллюляр карцино-манан - бауыр яман шешенең тәүге формаһынан һаҡлай ала. Шуға ла ҡәһүә кеүек кофеинлы эсемлектәрҙе зарарлылар исемлегенә индерергә ашыҡмаҫҡа кәрәктер, моғайын.

■ Социаль селтәрҙәр ҙә күптән бәхәс сығанағына әүерелгән, кемдер уларҙы зыянлы, тип иҫәпләй, кемдер уларҙы яҡлап сығыш яһай. Флорида университеты ғалимдары асыҡлауынса, социаль селтәрҙәрҙе әүҙем ҡулланыу психикаға зарар килтермәй. Шулай ҙа социаль селтәрҙәр кешенең ниндәй хис-торошта икәнен белгертә ала. Мәҫәлән, яңғыҙлыҡ тойғоһон кисергән, хатта үҙенә ҡул һалыр хәлгә етеүселәрҙең профилендә ниндәйҙер конкрет мәғлүмәт һалынмаған, шулай ҙа башҡаларҙың иғтибарын йәлеп иткән һәм уларҙа хәүеф тыуҙырған яҙмалар күберәк булған. Был үҙенә күрә ниндәйҙер ярҙам һорау булыуы ихтимал, ти белгестәр. Быға тиклем Калифорния университеты ғалимдары виртуаль дуҫлыҡтың да үҫмерҙәр өсөн ысын дуҫлыҡ кеүек үк мөһим булыуын белдергәйне. Интернет аша аралашыу улар өсөн ысынбарлыҡтағы кеүек үк. Ғалимдар шуға ла үҫмер өсөн интернетта аралашыуҙың мөһимлеген билдәләй һәм уларҙы бынан тыйыу ярамай.

■ Көндөҙ йоҡлап алһаң, йөрәк сирҙәре булмай, ти белгестәр. Бигерәк тә юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға был кәңәште тоторға кәңәш ителә. Греция ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 61 йәштәге 400 ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Көндөҙ йоҡлап алғандарҙың ҡан баҫымы яҡынса 5 процентҡа түбәнәйгән. Ошо проценттар ғына ла йөрәк өйәнәге һанына йоғонто яһай ала. Икенсе күрһәткестәр, анығыраҡ әйткәндә, пульс йышлығы ла башҡаларҙыҡына ҡарағанда яҡшыраҡ булған. Көндөҙгө йоҡо 1 сәғәт тирәһе булғанда һөҙөмтәләр ҙә юғары, ти белгестәр.

■ Тестостерон һәм кортизол гормондары артыҡ күп булһа, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән алдаша башлай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 117 кеше математик тест эшләп, уны үҙаллы тикшереп, һөҙөмтәһен ғалимдарға еткерергә тейеш булған. Дөрөҫ сиселгән мәсьәләләр аҡсалата бүләк менән билдәләнгән. Ғалимдар кешенең гормональ фоны менән алдашыуға һәләте булыуы араһында бәйләнеш булыуы йәки булмауы тураһында белергә теләп, анализдар ҙа алған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, кемдәр үҙенең уңышын арттырып әйткән, уларҙа кортизол менән тестостерон кимәле юғарыраҡ булған. Ғалимдар раҫлауынса, кортизол стресс хәлдәрендә күберәк бүленеп сыға, йәғни, кеше алдаша, һөҙөмтәлә стресс кисерә һәм уның кортизол кимәле лә күтәрелә. Ә тестостерон, киреһенсә, ҡурҡыу тойғоһон баҫа, йәғни, кеше яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн, алдашыуға бара һәм бының өсөн уға бер ниндәй ҙә яза булмаясағына ышана.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ХӘРӘМДӘН ТЫЙЫЛАЙЫҠ!

**Йыл да һуғым һуйыу мәле яҡынлашып килгәндә иң беренсе нәүбәттә "хәләл" һәм "хәрәм" төшөнсәләре хаҡында уйлана башлайым. Һәр мосолманға ифрат та етди булған ошо нәмәләр хаҡында аныҡ итеп белеү фарыз бит.**

Күптән түгел аҙыҡ-түлек магазиндарының береһендә "яйцо халяль" тип яҙылған ярлыҡты күреп ҡалдым. Миндә шунда уҡ "Хәләл түгел йомортҡа буламы икән?" тигән һорау килеп тыуҙы... Бәлки, бындай нәмәләргә кемдер иғтибар ҙа итмәйҙер. Яҡташтарыбыҙҙың хәләл ашамлыҡтар ҡулланырға тырышыуы, әлбиттә, бик яҡшы. Әммә күптәребеҙ хәрәм менән хәләлдең айырмаһын аңлап етмәй. "Хәләл" тигән һүҙ ғәрәпсәнән "рөхсәт итеү" (русса һы - разрешать) тип тәржемәләнә, ә "хәрәм" - тыйыу (запрещать). Ошо хаҡта һүҙ барғанда, әлбиттә, Аллаһы Тәғәлә тарафынан рөхсәт ителгән, йәиһә тыйылған нәмәләр күҙ унында тотола. Изге Ҡөрьәндә Раббыбыҙ хәмер эсеүҙе, сусҡа һәм үләкһә итен ашауҙы, ҡан эсеүҙе хәрәм ҡылған, йәғни ҡәтғи тыйған. Ә инде һәр төрлө йомортҡа, һөт, үҫемлек ризыҡтары хәрәм тип һаналмай. Шулай уҡ балыҡтың да бөтә төрө хәләл. Шуға күрә, магазиндан икмәк, макарон йәиһә ниндәйҙер көрпә алғанда "Былар хәләлме икән?" тигән икеләнеү һис булырға тейеш түгел. Башта әйтелгәнсә, "хәләл йомортҡа", тип яҙмаһалар ҙа, беҙ уның һәр саҡ хәләл икәнен беләйек.

Ә инде ит мәсьәләһенә килгәндә, быға ифрат та етди ҡарау кәрәк. Һыйырҙыҡы, йылҡы йәиһә һарыҡтыҡы булыу ғына иттең хәләллеген аңлатмай. Шәриғәт ҡануындары буйынса, Аллаһы Тәғәләгә иман килтергән (Уның барлығына һәм берлегенә һис шикһеҙ ышанған һәм Уға буйһонған) кеше тарафынан, Раббыбыҙҙың исемен иҫкә алып, йәғни, "бисмиллаһ" тип әйтеп боғаҙланған малдың ите генә - хәләл. Шуға күрә, мосолмандарҙың иткә тәғәйенләнгән хайуанын үҙе йә иһә үҙҙәре белгән башҡа берәй мосолман кешеһенән салдырырға тырышыуы - дөрөҫ. Үкенескә, күптәребеҙ үҙенең ҡыш буйы ашаясаҡ һуғымлығын кем салғанын да белмәй. Ниндәйҙер берәй ауылға заказ биреп, һуйылған әҙер итте генә барып алыуҙы хуп күрә бәғзеләр. Әммә үҙен мосолман тип һанаған һәр кем был мәсьәләгә битараф булырға тейеш түгел. Ит һатып алырға теләүселәр өсөн, шулай уҡ "Хәләл" тип аталған магазиндар республикабыҙҙың һәр ҡалаһында бар. Унда хәләллек хаҡындағы штамп ҡуйылған эре, ваҡ мөгөҙлө мал, ҡош-ҡорт иттәре һәм һәр төрлө колбаса продукттары, билмән, манты кеүек нәмәләр ҙә һатылып тора. Бәғзе берәүҙәр "Уларҙы нисек һуйғандарын кем ҡарап торған", тип, шундай кибеттәрҙәге ит продукттарының хәләллегендә икеләнә башлай. Миненсә, бында икеләнеү һис ярамай, сөнки иттең ысынлап та хәләл булыуы өсөн һатыусы, йә иһә уға һатырға итте тапшырған ойошма Аллаһы Тәғәлә алдында яуаплы. Мәҫәлән, "Турбаслы" ҡошсолоҡ фабрикаһын телеканалдарҙан да күрһәткеләйҙәр. Унда малды боғаҙлаусыларҙың дин тотоп, намаҙ уҡып йөрөгән кешеләр булыуы ла, әлбиттә, улар сығарған продукттарҙың хәләл булыуын иҫбатлай. Ә туҡмап, йәиһә башҡа төрлө ысул менән үлтерелгән малдың ите - хәрәм.

Хәләл һәм хәрәм хаҡында һүҙ йөрөткәндә, фәҡәт аҙыҡ-түлекте генә лә күҙ уңында тотоу кәрәкмәй. Аллаһы Тәғәлә тарафынан тыйылған,

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# БАУЫРҘЫ ТАҘАРТАБЫҘ ҺӘМ...

## дөйөм торошто нығытабыҙ



**Һоло менән таҙарыныу - ябай һәм зыянһыҙ процедура. Был ярманы көндәлек рационға индереү сәләмәтлек өсөн файҙалы ғәҙәттәрҙең береһе. Бауырҙы, үт юлдарын, тамырҙарҙы таҙартыу, йоҡоно тергеҙеү һәм организмдың дөйөм торошон яҡшыртыу өсөн күптән һыналған боронғо ысулдар бар. Бөгөн шуларҙың бер нисәһен тәҡдим итәбеҙ.**

● Таҙартылмаған бер ҡалаҡ һолоға төнгөләккә ярты литр һыу (фильтрланған булһа, яҡшыраҡ) ҡойоп ҡалдырабыҙ. Әгәр ҡан баҫымығыҙ күтәрелә торған булһа, 1 ҡалаҡ перловка ярмаһын да ҡушығыҙ. Иртән шул уҡ һыуҙа утты ныҡ асып, 2 минут ҡайнатырға, һуңынан ҡапҡасын ябып, 2 минут талғын утта быҡтырырға, артабан инде 10 минут таҫтамалға төрөп ҡуйырға. Һарҡытып, көн дауамында эсергә.

● 1 стакан һолоно дуршлаг аша иләп, йыуырға һәм төнгөләккә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста төнәтергә. Һарҡытып, ас ҡарынға иртән эсергә. Төнәтмәне көн дауамына ҡалдырырға ярамай, сөнки ул тиҙ әсей. Дауаланыу ваҡыты - 10 көн.

Холестерин кәмей, тире төҫө яҡшыра, тоҙҙар, шлактар һәм ҡом сыға.

**Әммә әгәр айырым ағзаларға йоғонто яһарға теләһәгеҙ, түбәндәге ысулдарҙы файҙаланығыҙ:**

● **Бауыр өсөн.** Дауаланыу курсы 15 көн. Ошо осор эсендә ярты стакан һоло төнәтмәһен тәүлегенә өс тапҡыр эсергә кәрәк. Төнәтмә былай әҙерләнә: 150 г орлоҡҡа 1 литр һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға һәм ике сәғәт төнәтергә.

● **Ашҡаҙан-эсәк трактын тулыһынса таҙартыу өсөн** махсус состав ҡулланыла. 500 г һолоно 3 литр һыуҙа орлоҡтар бүртҡәнсе 3 сәғәт тирәһе ҡайнатырға кәрәк. Артабан һыуытып, иҙергә һәм 1 литр ҡайнаған һыуҙа шыйығайтырға. Барлыҡҡа килгән киселде һыуытҡыста һаҡларға, йылытып ҡабул итергә йәки бер нисә көндә тулыһынса эсеп бөтөргә. Дауаланыу курсы 2,5 - 3 ай дауам итә. Был ваҡытта спиртлы эсемлектәр ҡулланырға, әсе, ҡыҙҙыу ризыҡ ашарға ярамай.

● **Эсәктәрҙе таҙартыу өсөн** сара эшләүгә бер стакан һоло, 2-3-әр бөртөк күрәгә һәм ҡара емеш (чернослив), бер ҡалаҡ йөҙөм, шунса көнбағыш орлоғо, бал ҡалағы ваҡланған грек сәтләүеге кәрәк буласаҡ. Тәүҙә ярмаға һыу ҡойоп ебетәбеҙ һәм ҡайнатабыҙ. Килеп сыҡҡан бутҡаны һыуытабыҙ һәм блендер менән иҙәбеҙ. Был татлы ризыҡты көн һайын иртәнге аш урынына ашарға мөмкин. Теләк буйынса уға етен орлоғо ҡушырға була.

● **Үт ҡыуҙырыу өсөн** сей һоло төнәтмәһе һөҙөмтәле. Һолоға 1:10 иҫәбенән һыуыҡ һыу ҡойоп, 24 сәғәт төнәтергә. Килеп сыҡҡан эсемлекте ашар алдынан 150 г эсергә.

● **Бәүел ҡыуҙырыу өсөн** бер стакан һолоға 1 литр һыу һалып, шыйыҡлыҡ күләме ике тапҡырға кәмегәнсе ҡайнатабыҙ. Һуңынан ике ҡалаҡ бал ҡушып, тағы 7 минут ҡайнатабыҙ. Бындай сараны көнөнә 3-4 тапҡыр ярты шар кружка эсергә кәрәк.

● **Диабет сире ваҡытында** һоло ярҙамында таҙарыныу холестеринды сығарырға һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын нығытырға ярҙам итә. Ғәҙәти төнәтмә эшләйбеҙ, уны һарҡытып, шул уҡ күләмдәге һыуһар һуты менән ҡатыштырабыҙ. Дарыуҙы 1,5-2 ай, көнөнә өс тапҡыр берәр кружка эсергә кәрәк.

✓ ***Бәйғәмбәребеҙ хәҙистәрендә, хәрәм ашаған, йә эскән, йәиһә башҡа тыйылған нәмәләр менән булышҡан кешенең доғаһына Аллаһы Тәғәләнең яуап бирмәү ихтималлығы хаҡында әйтелә.***





йәиһә рөхсәт ителгән һәр төрлө ғәмәлдәр (эштәр) ҙә күп. Мәҫәлән, алдау, урлау, ғәйбәт һөйләү, отошло уйындар һымаҡ насар нәмәләр - барыһы ла хәрәм һанала. Берәй кеше хәләл тип һаналған нимәнелер урлап ала икән, шул урланған нәмә был кеше өсөн, әлбиттә, хәрәм була. Кешеләрҙе алдау юлы менән тапҡан аҡсаға һатып алынған аҙыҡ-түлек, кейем йә башҡа берәй әйбер ҙә хәләл түгел. Быларҙан тыш, Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм тарафынан ҡәтғи тыйылған, хатта оло гонаһҡа һаналған башҡа нәмәләр хаҡында ла белеү мотлаҡ. Һәр төрлө күрәҙәләргә ышаныуҙың хәрәм икәнлеген, үкенескә, күп кешеләр белмәй, ә бик күптәр белергә теләмәй. Ошо хаҡта компетентлы булған бәғзе дин белгестәренең "күрәҙәселеккә ышаныу күркәм эш түгел", тип, ифрат та тыйнаҡ ҡына итеп кенә әйткеләүҙәрен ишетәм. Әммә ошо бик етди мәсьәләне ябай кешеләргә аңлатҡанда күпкә ҡәтғиерәк булыу кәрәк, минеңсә. "Бәйғәмбәр хәрәм тип әйткән нәмәне үҙ-үҙеңә, йәиһә бүтәндәргә рөхсәт итеү - оло гонаһтарҙан һанала", тип, аныҡ ҡына әйтелергә тейеш был турала. Шулай уҡ Аллаһ илсеһе, үҙе ҡушҡандарҙан тыш, динебеҙгә башҡа ғибәҙәт төрҙәре өҫтәп индереүҙе лә ҡәтғи тыйған. Ә Рәсүлулланың һәр бойороғо - Аллаһы Тәғәләнән.

Беҙ, мосолмандар, доға ҡылғанда: "Йә, Раббым Аллаһ, беҙгә ҡушҡандарыңды үтәп, тыйғандарыңдан тыйылып ғүмер итеүҙәребеҙҙе насип ҡыл!" тип Аллаһы Тәғәләгә ялбарабыҙ. Әгәр беҙ Раббыбыҙ тыйған нәмәне "хәләл", йәғни, мөмкин, тип һанайбыҙ икән, Уның әйткәндәрен инҡар итергә маташыу була бит! Быға миҫал өсөн алыҫ барырға кәрәкмәй. Киң мәғлүмәт сараларында йыш ҡына "шарап эсеү мәҙәниәтен күтәреү", йәиһә араҡыға хаҡ өҫтәү юлы менән илдә эскелеккә ҡаршы көрәшеүҙе хуплаусы төрлө фекерҙәр ишетергә тура килә. Бөйөк Аллаһ ҡәтғи тыйған хәмерҙе "аппетит өсөн", йәиһә "күңел асыу өсөн" тип, хатта илле грамм ғына "төшөрһәң" дә, бының гонаһы "бер-ике литр" эскәндең гонаһынан айырылмай. Икенсе бер миҫал. Кемдер берәү аңлы рәүештә билмәнгә "тәм өсөн", йәиһә, "йомшаҡлыҡ" өсөн бер аҙ ғына булһа ла суҫҡа майы ҡушып ебәрһә, ундай билмәнде ашау шулай уҡ хәрәм. Әгәр шундай аш төрөнә суҫҡа ите ҡушылғанлығын, йә иһә, бөтөнләйгә, һуғымының мосолман булмаған кеше салғанлығын йәшереп, икенсе кешегә "хәләл ул", тип ниҙер ашата икән, быға тик хужабикә яуаплы. Ҡунаҡҡа килгән кеше, әлбиттә, алдына ҡуйылған ит хаҡында төпсөнөп, "Кем быны һуйған, нисек салған", тип һорашҡылап ултырмай, хужаларға тулыһынса ышана...

Ҡәҙерле туғандар, бынан тыш тағы түбәндәге бер мәсьәләгә иғтибар итеүҙе мотлаҡ тип һанайым: ҡайһы берҙә, киреһенсә, Аллаһы Тәғәлә тарафынан рөхсәт ителгән нәмәләрҙе "хәрәм" тип һанау осраҡтары ла булғылай. Был да - яраған эш түгел. Үкенескә, ошо өлкәлә лә артыҡ шаштырыусылар бар. Әйтәйек, берәү икенсе дин кешеһенән йомортҡа, һөт, он һатып алды, ти. Уға кемдер: "Һин урыҫтан алғанһың бит, был - хәрәм", - тип әйтә икән, был кеше хаталана! Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм һәм уның сәхәбәләре мосолман булмаған халыҡтар менән дә алыш-биреш иткән. Бәғзе берәүҙәрҙән хатта торт, шоколад һымаҡ нәмәләр ҙә хәрәм, имеш, тигәнде ишетергә тура килә. Йәнәһе лә, яһаған ваҡытта уларға ниндәйҙер миҡдарҙа этил спирты ҡушалар... Уларҙы яһау технологияһына артыҡ инеп ваҡланыу ҙа ярамай, нәтижәләге сыҡҡан продукт бында төп мәғәнәгә эйә. Эш уға китһә, кефир, ҡатыҡтарҙың составында ла аҙ ғына миҡдарҙа спирт була! Биохимик анализдар юлы менән генә табыла торған бындай ваҡ-төйәктәргә артыҡ иғтибар итеү, урыҫса әйткәндә, "перестраховка" - килешмәгән нәмә!

Беҙҙең башҡортта ғаилә ҡорған кешеләр бер-береһен борон-борондан "хәләл ефет" тип атай. Никахты шәриғәт ҡанунына ярашлы итеп төҙөгәс кенә, кешеләр бер-береһенә хәләл була, йәғни, Аллаһы Тәғәлә тарафынан ирле-ҡатынлы булып йәшәргә уларға рөхсәт ителә, тип аңлау кәрәк. Шаһиттар алдында никахҡа егеттең һәм ҡыҙҙың, ҡыҙҙың атаһы йә иһә балиғ булған икенсе бер ир туғанының ризалығы алынып, шунан һуң ғына ғаилә төҙөүсе кешеләр бер-береһенә хәләл була алыуы хаҡында Ислам дине ҡанундары буйынса йәшәгән атай-олатайҙарыбыҙ борон-борондан белгән. Ә шунан тыш (хәҙерге бәғзе кешеләр уйлап сығарған "гражданлыҡ никахы" һ.б.) бер ниндәй ҙә никах хәләл була алмай. Бына шул хаҡта һәр мосолман белергә тейеш.

Һәр кемебеҙ ниҙер һорап, Аллаһы Тәғәләгә үтенәбеҙ. Үҙебеҙ белмәгән осраҡта, был хаҡта дин ҡағиҙәләрен белгән бүтән берәй кешегә әйтеп, Раббыбыҙға доға ҡылдырабыҙ. Бәйғәмбәребеҙ хәҙистәрендә, хәрәм ашаған, йә эскән, йәиһә башҡа тыйылған нәмәләр менән булышҡан кешенең доғаһына Аллаһы Тәғәләнең яуап бирмәү ихтималлығы хаҡында әйтелә. Бына ошо турала ла барыбыҙҙың белеүебеҙ мотлаҡ. Һәммәләребеҙ Раббыбыҙҙың тыйғандарынан тыйылып, Уның ризалығына ирешергә ынтылып, шунан ғына Уға доғаларыбыҙ менән мөрәжәғәт итәйек. Беҙ - мосолман кешеләре ошо ифрат та етди мәсьәләгә бармаҡ аша ғына ҡарамайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Ни өсөн мин түгел?

"Йәш сағымда мин үрҙәгеләр, мәҫәлән, кардиналдар, епископтар, генералдар, сәйәсмәндәр һәм финанс магнаттары донъяла нимә барғанын белеп тора, тип уйлай инем. Улар белергә тейеш. Хәҙер үҙем үрҙә ултырам һәм уларҙың бер нәмә лә белмәгәнен күрәм", тигән Дэвид Махоуни. Һеҙҙең дә шундай уйҙарығыҙ йыш тыуғандыр: донъяла бөтөн нәмәне белгән белгестәр бар. Ләкин ундайҙар булмай. Хатта иң уңышлы кешеләрҙең дә ундай һәләте юҡ, уларҙың да мейеһе берәү генә, тәүлегенә шул уҡ 24 сәғәт, ике ҡул, ике аяҡ. Бары тик улар үҙҙәрендә билдәле бер һөнәри оҫталыҡ тәрбиәләгән һәм улар үҙ белемдәренә баҙарҙа һорау тапҡан. Беҙгә лә шуны эшләргә кәрәк. Ҡыҫҡаһы, тыуғанда берәүгә лә уңыш өсөн айырым сертификаттар бирмәйҙәр. Аллаһы Тәғәлә эргәңә килеп, бер ваҡытта ла: "Һинең сәғәтең һуҡты!" - тимәйәсәк. Ул бер ваҡытта ла нимә ҡулыңдан килгәнен, нимәгә көсөң еткәнен һөйләмәйәсәк. Быны һин үҙең хәл итәһең!

## Уҡыусы әҙер булһа…

Тормошоңдо тамырынан үҙгәртергә йәки ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшергә ҡарар итһәң, ғаләм һиңә үҙе төрлө варианттар биреп ярҙам итә башлар. Уйламағанда кәрәкле кешеләр осрар, дуҫтарығыҙ файҙалы китап бүләк итер, гәзиттәге иғлан күҙегеҙгә салыныр, осраҡлыҡ уңайлы ваҡытта кәрәкле урынға килтерер.

Был беҙҙең уңайлы хәл-торошҡа иғтибар итеүебеҙҙе аңлатамы, әллә уңайлы ваҡытҡамы? Икеһен дә.

Гелән 1983 йылдың 19 октябрен иҫемә алам. Ул көндө мин бынан ары нимә генә булһа ла, быға тиклем йәшәгән 25 йылыма ҡарағанда бәхетлерәк йәшәйәсәкмен, тип ҡарар иткәйнем. Өс көндән һуң, бер сәбәпһеҙ, радиомды быға са тыңламаған станцияға көйләнем һәм ыңғай психология буйынса буласаҡ семинарҙарҙың анонсына юлыҡтым. Уларға яҙылдым һәм тормошом ҡырҡа боролош алды.

Бында бер ниндәй ҙә ғәҙәти булмаған нәмә юҡ. Был, күрәһең, тормош ҡағиҙәһелер. Иң мөһиме - тәүәккәлләргә. Тәүәккәллек - нимәгәлер өлгәшеү теләге генә түгел, ә бының өсөн барыһын да, хатта мөмкин булғандан артығыраҡты эшләү өсөн ныҡлы ышаныс та.

Ҡыҫҡаһы, бары тик тәүәккәлләргә генә кәрәк, маҡсатты тормошҡа ашырырға ресурстар табыласаҡ. Әлбиттә, был уңышты хәл-ваҡиғаларҙың уңышлы ағышы, тип тә аңлатырға була. Әммә тормошҡа ентекләберәк ҡарағанда, уларҙың даими ҡабатланыуына иғтибар итергә мөмкин.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ӘРЕМ, ГӨЛБАҘРАН...

## паразиттарҙан ҡотҡара

**Паразиттарҙан ҡотолоу һәм организмды дөйөм таҙартыу өсөн иң һөҙөмтәле һәм еңел ысул - 21 көн дауамында әсе әрем менән ҡәнәфер эсеү. Әрем - ҙур паразиттарҙы, ҡәнәфер уларҙың йомортҡаларын һәм ҡарышлауыҡтарын юҡ итә.**

Ике үҫемлекте айырым-айырым кофе тарттырғыстан үткәрергә кәрәк (кофе тарттырғысты шунда уҡ яҡшылап йыуығыҙ, сөнки үләндәрҙең еҫе тиҙ һеңә). Ваҡланған үлән ҡатнашмаһын киске аш алдынан көнөнә берәр балғалаҡ (ололар өсөн - өйөп, балаларға өймәй генә) әрем, шунан ҡәнәфер ҡабул итергә кәрәк.

Ни өсөн кисен ҡабул итергә? Сөнки паразиттар кискә табан әүҙемләшә. Әрем әселеген баҫыр өсөн баллы һыу эсергә мөмкин. Ә инде киске аш әрем һәм ҡәнәфер тәмен баҫа.



Үпкәләргә һауа тултырып, тарттырылған үләндәрҙе ҡабырға һәм һыу эсергә, ошо ваҡытта тын алырға түгел, ә тынды сығарырға кәрәк. 21 көндән һуң һәр өсөнсө көн профилактика өсөн ҡабатлап тороу зарур.

Үләндәрҙе бешекләргә ярамай, сөнки йылытыу тәьҫирендә уларҙың файҙалы сифаттары юғала.

Таҙарыныу ваҡытында бик күп үлгән паразиттар сығыуы мөмкин, бындай әселеккә уларҙың бер генә төрө лә сыҙамай.

Әгәр ауырлығығыҙ 100 кг икән, һеҙҙә 10 кг паразит йәшәүе ихтимал.

Был ябай мөғжизәле ысулды ике аҙна ҡулланғандан һуң һиҙелерлек еңеллек киләсәк. Рәттән 21 көндән артыҡ эсергә ярамай, сөнки организмдан сығарылмаҫҡа тейешле паразиттар ҙа бар.

Паразиттарҙан ҡотолоуҙың тағы бер ысулы: 3 балғалаҡ әрем, 2 балғалаҡ гөлбаҙран (пижма), 1 балғалаҡ ҡәнәфер. Үләндәрҙе тарттырып, бергә ҡушып болғарға. Ҡалаҡ осона ғына алып ҡулланыуҙан башлап, бер аҙнала дозаны ярты балғалаҡ күләменә еткерергә. Киске аш алдынан ярты стакан ҡырылған кишергә ҡушып, ас ҡарынға ҡабул итергә. Гөлбаҙран әремдең тәьҫире булмаған патологик паразиттарҙы үлтерә.



## 11 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт" (16+).
12.50, 17.00, 01.15 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Четвертая жертва", "Игры в куклы". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия". "Кошки-мышки". Детективный сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.00 "Вечерний телецентр" (12+).**
**19.30 "Бай" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Дорожный патруль" (16+).**
**20.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Без единой улики". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 12 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.20, 03.05 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.50, 17.00, 00.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.30 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 01.25 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 3-я и 4-я серии. Детективный сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Зодиак", "Круг судьбы". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Бессонница". Сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Адаптация". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 13 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.20, 03.05 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.50, 17.00, 00.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 01.25, 03.35 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 5-я и 6-я серии. Сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Бетховен", "Провокация". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Без срока давности". Сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.00 "Мед и липа или фермер против мошенников" (12+).**
**17.45 "Орнамент (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Точка зрения ЛДПР" (16+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Легкое поведение". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 14 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Жить здорово!" (12+).
10.40, 02.50, 03.05 "Модный приговор".
11.35, 12.15 "На самом деле" (16+).
12.55, 17.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 Новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серебряный бор". 7-я и 8-я серии. Детективный сериал (12+).
23.40 Кубок Первого канала по хоккею 2017. Сборная России - сборная Швеции. Трансляция из Москвы.
02.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00 "Вести"
13.40 "Вести-Башкортостан".
14.00 Пресс-конференция Президента Российской Федерации Владимира Путина. Прямая трансляция.
17.00 "Вести".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия-17". "Условный рефлекс". Сериал (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Морозова". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Мед и липа или фермер против мошенников" (12+).**
**17.45 "Современник" (12+).**
**18.00 "Автограф" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Придурок". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 15 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.55, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" (16+).
23.30 "Голос". Новый сезон (12+).
01.30 "Вечерний Ургант" (16+).
02.25 "Полтергейст". Триллер (16+).
04.10 "В ритме беззакония". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Ошибка", "Закон парных случаев". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
23.35 Торжественная церемония вручения российской национальной музыкальной премии. Трансляция из Государственного Кремлевского дворца.
02.25 "Превратности судьбы". Худ. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Людмила Зыкина. "Здесь мой причал..." (12+).**
**11.00, 19.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 С.Лобозеров. "Кавардак" (12+).**
**14.00 "Хазина о Хазине".**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**24.00 "Злоключения Альфреда". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.15 А.Хусаинов. "Бандабика и Еранса Сәсән" (12+).**

## 16 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Дети понедельника". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Римма Маркова. Слабости сильной женщины".
11.20 "Летучий отряд".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 "Идеальный ремонт".
13.30 "На 10 лет моложе" (16+).
14.25 "Время кино".
17.05 "Сегодня вечером" (16+).
18.50 Кубок Первого канала по хоккею 2017. Сборная России - сборная Канады. Прямой эфир. В перерывах - Вечерние новости (с субтитрами).
21.15 "Время".
21.35 "Голос". Новый сезон (12+).
23.30 "Прожекторперисхилтон" (16+).
00.05 "Короли фанеры". Музыкальное шоу (16+).
00.50 "Познер". "Родион Щедрин" (16+).
01.50 "Все без ума от Мэри". Романтическая комедия (16+).
04.00 "Модный приговор".
05.05 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.40 "Срочно в номер!-2" Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания". Юмористическая программа (16+).
14.00 "Через беды и печали". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Позднее раскаяние". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.55 "Напрасная жертва". Худ. фильм (12+).
02.50 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Детективный сериал.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Гладиаторы Рима" (6+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00 "Это мы!" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**11.45 "Замандаш".**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**17.00 Творческий вечер народного артиста РТ Фидана Гафарова (12+).**
**19.00 "Звездный Байыҡ" (12+).**
**19.30 "Колесо времени" (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**24.00 "Суп с капустой". Худ. фильм (6+).**
**01.45 Новости недели (на башк. яз.).**
**02.15 Т.Гарипова. "Убежавшие в счастье" (12+).**

## 17 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Русское поле". Худ. фильм.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.00 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.00 Новости.
10.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
11.10 "Смак". Кулинарное шоу (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дорогая переДача".
12.45 "Теория заговора" (16+).
13.40 "Дело декабристов" (12+).
15.40 "Он и она. Музыкальное шоу.
17.30 "Русский ниндзя".
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр.
23.40 Кубок Первого канала по хоккею-2017. Сборная России - сборная Финляндии. Трансляция из Москвы.
02.00 "Линкольн". Биографическая драма.

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер!-2" Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 Кастинг Всероссийского открытого телевизионного конкурса юных талантов "Синяя птица".
11.50 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.35 "Куда уходят дожди". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
17.30 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя птица".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Американский отдел. Капкан на ЦРУ". Док. фильм (12+).
02.25 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Сериал.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 В.Аношкин. "Урал батыр" (12+).**
**18.00 "Славные парни". Худ. фильм (16+).**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Золото". Худ. фильм (16+).**

✓ *Ufa-forum бына шулай төрлө һөнәр эйәләрен, төрлө өлкәлә белем алыусы йәштәрҙе һәм ололарҙы берләштергән, бер-береһен тыңларға, ишетергә өйрәткән сара булып сыҡты. Форумдың өсөнсө көнө ғәмәли оҫталыҡ көнө булды.*

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# КИЛӘСӘКТЕ ҠАЙҒЫРТҠАНДАРҘЫ...

## Ufa-forum осраштырҙы

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала йәш быуынға тәжрибәһе, белеме менән уртаҡлашырға теләгән һөнәр эйәләре һәм уларҙы тыңларға, уларға ҡарап өйрәнергә әҙер йәштәр бер майҙансыҡта осрашты. Республика ғына түгел, күрше өлкәләрҙән, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларынан килеүселәргә был мөмкинлекте Ufa-forum йәштәр мәғариф киңлеге бирҙе. Өс көн дауамында барған сарала 700-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, һәр кем үҙенә ҡыҙыҡлы өлкә буйынса башланғыс белем һәм һөнәр арттыра алды.**



Йәштәр өсөн йәштәр тарафынан үткәрелгән сара булараҡ, Ufa-forum былтыр бөтәһененң дә иғтибарын йәлеп иткәйне. Баштан уҡ ойоштороусыларҙың үҙ тиҫтерҙәрен заман талаптарына яуап бирерлек маҡсатлы һәм компетентлы белгес, белемен камиллаштырырға әҙер шәхес, һүҙ урынына эше менән дәлилләргә әҙер кеше итеп күрергә теләүе ылыҡтырҙы. Ufa-forum йәштәр мәғариф киңлеген ойоштороусы Мәскәү һәм Санкт-Петербург студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы, Силәбе өлкәһененң Башҡорт йәштәре иттифағы, Башҡорт проекттары төркөмө ағзалары власть вәкилдәренә лә, ябай халыҡҡа ла үҙҙәре алған позицияны аңлатып еткерә алды. Шуға быйыл Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов яғынан яҡлау тапҡан проект тағы ла ҙурыраҡ масштаб алыр, тигән өмөт бар ине һәм ул аҡланды.

Ufa-forum йәштәр мәғариф киңлеген асыу тантанаһында БР хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиев инициативалы йәштәргә уңыштар теләп, Башҡортостан йәштәр сәйәсәте буйынса закон ҡабул итеүсе тәүге республика булыуы һәм был өлкәлә эшләргә нигеҙ барлығын, иң мөһиме, Республика Башлығы тарафынан яҡлау булыуы тураһында телгә алды. "Белинскийҙар күп, Гоголь бирәү, тигән кеүек, аныҡ тәҡдимдәр күберәк булһын. Бындай форумдарҙа нәҡ шулай булырға тейеш", - тигәйне Марат Шәрип улы. Артабан, "Башҡортостан йәштәрененң бөгөнгөһө һәм киләсәге" темаһына арналған фекер алышыу барышында нәҡ шул аныҡ тәҡдимдәр яңғыраны ла инде. Республиканың миграцион сәйәсәтенә ҡағылышлы, сит өлкәләргә күсеп киткән йәштәрҙе кире ҡайтарыу, бында эшкә йәлеп итеү мәсьәләһе тураһында БДУ-ның стратегик үҫеш буйынса проректоры Рөстәм Ахунов, БР Фәндәр академияһы ғилми хеҙмәткәре Гөлдәр Хилажева төплө доклад яһаны. Был фекер алышыуҙа РФ Президенты граждандар йәмғиәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттар фонды етәксеһе Наталья Алиева һәм Skyeng мәктәбенең бизнес-үҫеш буйынса директоры Александр Ларьяновский ҙа ҡатнашты. "Беҙҙең компанияның офисы Мәскәү ҡалаһында урынлашҡан, өс меңдән ашыу хеҙмәткәребеҙ бар. Әммә шул өс мең кеше араһында етмешкә яҡыны ғына мәскәүҙәр, ҡалғандары төрлө төбәктәрҙән, улар юғары эш хаҡына ситтән тороп эшләй. Һеҙҙең дә мөмкинлектәр ҙур. Бөгөн бында килгәнһегеҙ икән, тимәк, уйларға һәм үҙгәрергә теләгегеҙ бар", - тип өндәште Александр Ларьяновский Конгресс-холл тамаша залына йыйылған йәштәргә.

Шулай уҡ үҙ өлкәһендә профессионал булған шәхестәрҙең береһе - ААА TRUST инвестиция компанияһының генераль директоры Игорь Дубинников был юлы ла йәштәргә кәңәштәре, бәйләнештәре менән ярҙам итергә теләген белдерҙе. Мәскәү ҡалаһындағы "УГМК-Холдинг" компанияһының баш юридик консультанты, Ironman триатлон буйынса ярышта ҡатнашыусы Ленар Рахманов йәштәргә биткоин, блокчейн һәм криптовалюта тураһында ентекле лекция һөйләне. Был спикерҙың шәхесе, беренсенән, йәштәргә шундай ҡыҙыҡлы темалар буйынса мәғлүмәт еткереүе менән иғтибарҙы йәлеп итһә, икенсенән, яҡташыбыҙҙың иҫ киткес ихтыяр көсө бөтәһен дә шаҡ ҡатырҙы. Лекциянан һуң, Ufa-forum һәм бында йыйылған йәштәр тураһында фекерен һорашҡас, ул: "Тәжрибәмдән сығып, Өфө өсөн был ярайһы уҡ яҡшы кимәлдә ойошторолған сара, тип әйтә алам. Тағы бер тапҡыр республикала үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алып эшләй белгән кешеләр күп булыуын иҫбат итте. Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тигәне һәр ваҡыт иҫтә, йәштәр төрлө өлкәләр буйынса белемен камиллаштырыуҙы маҡсат итеп килгән бында. Минең сығышымды ла бик ҡыҙыҡһынып тыңланылар", - тине ул.

Бизнес, технологиялар һәм етештереү өлкәһенә ҡағылышлы лекцияларҙа шулай уҡ "Уфанет" АЙ генераль директоры Искәндәр Бәхтейәров компанияның лидеры булыу ысулдары тураһында, Global Communication Vision SSM агентлығын асыусы Рөстәм Әғзәмов Instagram социаль селтәрендә һатыу итеү серҙәре, Рәсәйҙең 48 ҡалаһында эшләүсе farfor.ru сайтын булдырған Тимур Ханбиков IT технологиялар ярҙамында эштең сифатын арттырыу, Модульбанктың өлкән бизнес-аналитигы Нур Ибраһимов тиҙ арала яңы продукт эшләп сығарыу, оҙаҡ йылдар Башкирнефтепродукт, ОЗНА, Таргин компаниялары топ-менеджеры вазифаһын башҡарыусы Рәмил Хисмәтуллин һатыу итеү системаһын төҙөү һәм етәкләү логикаһы, ExactFarming компанияһының дизайн бүлеге етәксеһе Илдар Кинйәбулатов Desing Sprint методологияһы, Өфөләге Directium асыштар үҙәге етәксеһе Руслан Ғәббәсов һаҡсыл стартап, "На волне" Digital агентлығы етәксеһе Тәлғәт Юнысов бизнес эшләү, Интернет башланғыстарҙы үҫтереү фондының инвестициялар буйынса белгесе Тимур Хафизов проектты ҡараған инвесторҙар нимә күрергә теләүе тураһында һәм башҡа темаларға сығыштар яңғыраны. Ғөмүмән, ойоштороусылар бизнес өлкәһенә ҡағылышлы темалар буйынса юғары кимәлдәге белгестәргә мөрәжәғәт итеп, темалар бик төплө һәм фәһемле итеп яҡтыртылды.

Әйтергә кәрәк, Ufa-forum йәштәр мәғариф киңлегендә "Йәмғиәт" һәм "Мәғариф" тематик бүлектәре буйынса ла фекер алышыу майҙансыҡтары эшләне. Бөгөн республикала ғына түгел, бөтә илдә актуаль яңғыраған туған телдәрҙе уҡытыуға арналған фекер алышыу майҙансығында БР Мәғариф министрлығы, баш ҡалала урынлашҡан ғилми учреждениелар ағзалары, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре бик ҡыҙыу бәхәсләште. Әлбиттә, Ufa-forum йәштәргә башҡорт халҡының тарихын танытыу, уларҙың рухын күтәреү йүнәлешен дә иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығы, граждандар һуғышы, йәш быуындың киләсәге тураһында Азат Ярмуллин, Салауат Хәмиҙуллин, Рәмил Рәхимов, Юлдаш Йосопов, Эльвира Моталовалар сығыш яһаны.

Ufa-forum бына шулай төрлө һөнәр эйәләрен, төрлө өлкәлә белем алыусы йәштәрҙе һәм ололарҙы берләштергән, бер-береһен тыңларға, ишетергә өйрәткән сара булып сыҡты. Форумдың өсөнсө көнө, алдан әйтелгәнсә, ғәмәли оҫталыҡ көнө булды. Йәштәр егерменән ашыу тема буйынса стратегик фекерләү, үҙ-ара аралашыу, ораторлыҡ оҫталығы, интернет селтәрендә авторлыҡ хоҡуғын һаҡлау, Instagram ярҙамында аҡса эшләү, тиҙ арала үҙ маҡсатыңа ирешеү, йога күнекмәләре, квадрокоптер осорорға өйрәнеү, ғәрәп алфавитын өйрәнеү, тайм-менеджмент серҙәре, бизнес идея эҙләп табыу юлдары һәм башҡа бик файҙалы һәм ҡыҙыҡлы практик дәрестәр алды. Йәштәр бигерәк тә Фатима Янбаеваның социаль селтәрҙә үҙ брендыңды күтәреү, Илдар Кинйәбулатовтың дизайн, Гүзәл Рәжәпованың ораторлыҡ оҫталығы, Сәриә Сәлихованың тиҙ арала маҡсатҡа ирешеү, Татьяна Круцебоның тайм-менеджмент буйынса биргән практик дәрестәрен яратып ҡабул итте.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (22) дүшәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 12 (23) шишәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 13 (24) шаршамбы | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 14 (25) кесе йома | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (26) йома | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (27) шәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (28) йәкшәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 декабрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия 16+

**9 декабрь Премьера "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**10 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**12 декабрь "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+

**14 декабрь "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+

**15 декабрь "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 декабрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**10 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00 0+

**10 декабрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 декабрь II "Аманат"** Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың республика конкурсының Гала-концерты 0+

**14 декабрь "Төштәге йыр" Марсель Ҡотоевтың** яңы программаһы 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**9 декабрь "Аҫылйәр"** (М. Фәйзи), музыкаль комедия 12+

**15 декабрь Премьера "Көйһөҙ кейәү"** (Н. Гоголь), комедия 12+

✔ *Айыуҙы еңгән - ярты ир, асыуҙы еңгән - бөтөн ир.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ



# КИЛӘСӘКТЕ ҠАЙҒЫРТҠАНДАРҘЫ...

## Ufa-forum осраштырҙы

**(Башы 15-се биттә).**

"Әле генә форумға килгән йәштәр менән вуҙдың тамаша залында ораторлыҡ оҫталығы буйынса төрлө күнекмәләр эшләнек, һәр кем үҙенең кеше алдында тотошон, телмәр оҫталығын һынап ҡарай алды һәм улар бер-береһен күҙәтмәләп, ярҙам күрһәтеп ултырыуын күрҙем. Был форум гәмәли оҫталыҡҡа ҙур иғтибар бүлеүе менән оҡшаны. Алыҫ районлларға Өфө, Мәскәү спикерҙары барып етмәй. Ә бында ике көн эсендә шул тиклем күп мәғлүмәт алыу мөмкинлеге бар һәм шуны ҡулынан ысҡындырмаған йәштәргә афарин", - тине "Театр слова" студияһы етәксеһе Гүзәл Рәжәпова. Әйткәндәй, практик белем алғандан һуң йәштәр, ниһайәт, өс көн дауам иткән Umarta проекттар оҫтаханаһының эшен йомғаҡлап, тәҡдим иткән проектын эксперттар алдында яҡлауҙа ҡатнашты. Компетентлы баһалама комиссияһы төп призды - 100 мең һум аҡсаны, өс командаға бүлеп бирҙе. Әбйәлил районы егете Тамъян Ғәбитовтың проекты 40 мең һумлыҡ приз һәм Интернет башланғыстарҙы үҫтереү фондының акселераторында ситтән тороп ҡатнашыуға сақыры ҡағыҙы отто. Шулай уҡ 40 меңлек приз ӨДАТУ магистранттарының "Smart Motor" яңы быуын аппаратарын йөрөтөү өсөн тәғәйенләнгән вентилле электродвигатель төҙөү буйынса проекты өсөн бирелде. Өсөнсө урынды былтырғы Ufa-forum сараһында беренсе урын яулаған Республика инженер лицей-интернаты уҡыусылары Алмас Ғарифуллин һәм Александр Батыргәрәйев яуланы. Уларҙың проекты Башҡортостан аҙыҡ-түлек магазиндарында NFC технологияһын интеграциялау мәсьәләһенә бағышланды һәм егеттәр уны тормошҡа ашыра башлау өсөн 20 мең һум ярҙам алды. Был проекттарҙан тыш, экология, туризм, аҙыҡ-түлек менән һатыу итеү, туған телдәрҙе өйрәнергә ярҙам иткән программа, балалар уйынсыҡтары буйынса бик яҡшы проект эштәре тәҡдим ителде. Эксперттар хөкөмөнә сығарылған ун һигеҙ проект араһында ин-индәрҙе һайлап алыу еңел булмаһа ла, киләсәктә ысынлап та тормошҡа ашырырлыҡ булған идеяларға тәүге ярҙам һәм дәртләндереү призлары рәүешендә артабан үҫергә юл асылды. Проекттарҙы баһалаусы эксперттарҙың береһе Рәмил Хисмәтуллин әйтеүенсә, сиктәрҙән арыныраҡ теләгән йәштәр өсөн дә Ufa-forum бик уңайлы майҙансыҡ. "Егеткә 14 йәш, ул тәҡдим иткән проект бөтөнләй яраҡлы түгел, әммә унда үҙен күрһәтеп ҡалыу, ниндәйҙер эш аткарыу теләге юғары икән - был бик ҡиммәтле. Бер нисә тапҡыр шулай уңышһыҙ сығыш яһағандан һуң, ул өйрәнеп, барыбер һөҙөмтәле эш күрһәтер. Umarta проекттар оҫтаханаһында республика киләсәге өсөн актуаль проекттарҙы табабыҙ һәм күтәрмәләйбеҙ икән, шунан да әһәмиәтлерәк эш була аламы?" - тине Рәмил Хисмәтуллин форум тураһында фекерҙәрен дәлилләп.

Ufa-forum тамам, ә унан ниндәй тәьҫораттар ҡалды һуң? Был һорауға саҡырылған ҡунаҡтарҙың береһе Интернет башланғыстарҙы үҫтереү фондының инвестициялар буйынса белгесе Тимур Хафизовтың яуабы тулы яңғырар, моғайын. Әйткәндәй, ул сығышы менән Өфө ҡалаһынан."Бындай сараларҙың кимәле ниндәй, ниндәй аудиторияға йүнәлтелгән булыуға ҡарамаҫтан, үткәреү кәрәк, - тине ул. - Сөнки бөгөн Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә күрһәтелгән әүҙемлек мөһим. Мөмкин тиклем был эшкә билдәле шәхестәрҙе йәлеп итергә кәрәк, улар килеп тәжрибә уртаҡлашһын, проект эшләүселәргә үҙ баһаһын әйтһен. Өфө кеүек ҡалаларҙа төрлө кешеләрҙе бергә туплаған, яңы идеяларҙы бойомға ашырыуға әтәргес көс биргән, йәштәрҙе белемгә әйҙәгән үҙәк мотлаҡ булырға тейеш. Бөгөн бында килгән йәштәр менән спикерҙар бер тигеҙ кимәлдә аңгәмәләште, сөнки беҙ мәғлүмәтле булыу кимәле менән генә бер-беребеҙҙән айырылабыҙ. Йәштәр өсөн интернет селтәре бик күп мөмкинлектәр аса, шуларҙы дөрөҫ ҡулланып өйрәнһендәр, әүҙем булһындар..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ил иҡтисады ҙур үҙгәрештәр кисерәсәген күҙаллаған белгестәр фекеренсә, яҡын киләсәктә бөтөнләй икенсе һөнәрҙәр буйынса, бөтөнләй башҡа сифаттарға эйә профессионалдар талап ителәсәк. Әлбиттә, уларҙың ҙур өлөшө IT-технологиялар, заманса техника менән бәйле буласаҡ. Ошо шарттарға яйлап ҡына йәштәрҙе бөгөндән әҙерләй башлауҙы үҙ өҫтөнә алған форумдың төп ойоштороусылары Әлфир Илбаҡтин, Илдар Кинйәбулатов, Азат Бадранов кеүек алдынғы ҡарашлы, тиҫтерҙәренә үрнәк булған лидерҙарҙы киләсәктә республикабыҙ төрлө тармаҡтарҙа тотороло үҫешһен, Рәсәйҙең алдынғы төбәктәре рәтендә юғары позицияла торһон өсөн нигеҙ һалыусылар, тип иҫәпләргә мөмкин. Киләсәктә улар йыл һайын бер тапҡыр ҙур форум үткәреүҙән тыш, даими рәүештә йәштәр менән төрлө мәғариф сараларын ойоштороуҙы күҙаллай. Өҫтән төшөргәндә көтөп тормаған һәм үҙе өсөн бер ниндәй табыш-файҙа эҙләмәгән ошо йәш лидерҙарға республика мәнфәғәтендә башҡарған эштәрендә уңыштар юлдаш булһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ХОККЕЙ

# ӨС УЙЫН...

## өс еңеү

**Яраткан хоккей командабыҙ, ниһайәт, һөҙөмтәле уйындар уҙғара башланы. Һуңғы өс матчта ла еңеү яулап, "Салауат Юлаев" үҙ көйәрмәндәрен һөйөндөрҙө. Ситтә юлаевсылар Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ы, ә Өфөлә Минскиҙың һәм Мәскәүҙең "Динамо"лары менән көс һынашты.**

Ҡаҙандағы осрашыуҙың тәүге осоро ике командаға ла мәрәй килтермәне. Икенсе осорҙа иһә юлаевсылар етеҙерәк булып сыҡты - трибуналағы Өфө командаһы көйәрмәндәре шатлығына Антон Бурдасовтың шайбаһы хужалар ҡапҡаһына инеп етте. Башҡаса был уйында голдар булманы һәм матч еңеүсеһе исемен "Салауат Юлаев" яуланы. Ҡапҡаһы Бен Скривенс үҙ ҡапҡаһына ташланған 27 шайбаны ла кире ҡағып, әлеге миҙгелдә өсөнсө уйынын ҡоро иҫәп менән япты. Уйын иҫәбе 0:1.

Минскиҙың "Динамо"һы менән матч та юлаевсылар файҙаһына тамамланды. Был уйында ла беренсе осорҙа иҫәп асылманы. Ләкин икенсе осорҙа хужалар бер-бер артлы ике гол индереп, алға сыҡты. Өсөнсө осор ҡоро иҫәп менән ябылды. Шулай итеп, матч юлаевсылар файҙаһына, 2:0 иҫәбе менән тамамланды.

Мәскәүҙең "Динамо"һын юлаевсылар октябрь айындағы осрашыуҙа 3:2 иҫәбе менән еңгәйне. Шуға күрә Мәскәү уйынсылары әлеге уйынға тик еңеү артынан килеүҙәрен тәүге минуттарҙа уҡ күрһәтте. Беренсе осорҙоң алтынсы минутында "Динамо" үҙенең файҙаһына бер гол яҙҙы. Ләкин хужалар ҙа төшөп ҡалғандарҙан түгел - теүәл 30 секундтан Энвир Лисиндың голы иҫәпте тигеҙләне. Икенсе осорҙа иһә юлаевсылар алға сыҡты, тик өсөнсө осорҙа таблолағы һандар тағы ла тигеҙләнде. Был матчта нөктәне өҫтәлмә уйын минуттарында Тему Хартикайненың "Динамо" ҡапҡаһына инеп яткан шайбаһы ҡуйҙы. Көсөргәнешле осрашыуҙа, 3:2 иҫәбе менән, юлаевсылар еңеү яуланы.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘЙЛЕ АРЫҪЛАНҒА...

## ҡуян да ташлана

Айыуҙы еңгән - ярты ир, асыуҙы еңгән - бөтөн ир.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше ғүмере шулай үтә: бәләкәй генә ҡаршылыҡтарға ҡаршы көрәшергә ҡурҡаһың һәм бер туҡтауһыҙ йәненә тыныслыҡ эҙләйһең, ә ундай ҡаршылыҡтар булмай башлаған, өлгәшелгән йән тыныслығы түҙеп тормаҫлыҡҡа әйләнә.

**(Б. Паскаль).**

Кем ниндәйҙер эште башлар алдынан уҡ үҙен яртылаш еңелгән тип иҫәпләй, ул, ысынлап та, көрәшкә тотонғанда уҡ яртылаш еңелгән була.

**(Д. Писарев).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Фәлсәфә профессоры аудитория алдында тороп, биш литрлы һауыт ала һәм уны өс сантиметрҙан бәләкәй булмаған таштар менән тултыра. Һуңынан студенттарҙан һорай: "Һауыт тулымы?" "Тулы", - тип яуап бирә йәштәр.**

**Профессор шул уҡ һауытҡа борсаҡ һала. Борсаҡ таштар араһындағы бушлыҡты тултыра. Һуңынан һорай: "Һауыт тулымы?" "Тулы", - тип яуаплай тағы ла йәштәр.**

**Профессор ҙур йәшник алып, эсендәге ҡомдо һауытҡа түңкәрә. Әлбиттә, ҡом бушлыҡты бөтөнләй ябып ҡуя. Тағы шул уҡ һорау яңғырай: "Һауыт тулымы?" "Тулы, хәҙер инде туп-тулы", - тип яуап бирә йәштәр.**

**Шунан профессор өҫтәл аҫтынан һыу ала ла, уны һауытҡа ағыҙа.**

**Студенттар араһында көлөү яңғырай.**

**- Ә хәҙер минең шуны аңлатҡым килә, - тип дауам итә профессор. - Һауыт - ул һеҙҙең ғүмерегеҙ. Таштар - ғүмерегеҙҙең иң ҡиммәтле, кәрәкле нәмәләре: ғаилә, сәләмәтлек, дуҫтар, балалар - бөтә нәмәне юғалтҡан хәлдә лә, был "таштар" һеҙҙең тормошто барыбер тулы итеп торасаҡ. Борсаҡ - ул бары тик үҙең өсөн генә ҡиммәткә эйә булған нәмәләр: эш, өй, машина. Ҡом - ул ваҡ-төйәк әйберҙәр. Әгәр ҙә һауытты тәүҙән үк ҡом менән тултырһаң, таш, борсаҡтар өсөн урын ҡалмаясаҡ. Тимәк, ваҡ-төйәккә ваҡытты әрәм итһәң, мөһим әйберҙәр өсөн урын ҡалмаясаҡ. Бәхет килтергән нәмәләр менән шөғөлләнегеҙ: балалар менән уйнау, тормош иптәшең менән ваҡыт үткәреү, дуҫтар менән осрашыуҙар - барыһы ла ысын бәхет сығанаҡтары. Эшләү, өй йыйыштырыу, машинаны йүнәтеү, йыуыу өсөн гел ваҡыт табыласаҡ. Иң элек таштарҙы хәстәрләгеҙ, мөһим нәмәләрҙе уйлағыҙ, ҡалғандары бары тик ҡом ғына ул.**

**Шул ваҡыт бер студент ҡулын күтәреп, шулай тип һорай:**

**- Ә һыуҙың бында ни ҡыҫылышы бар?**

**- Бик шәп һорау. Ни өсөн һауытты һыу менән тултырҙым һуң? Һауыт тулы булһа ла, һыу өсөн урын етте. Тимәк, ғүмерегеҙ нисек кенә тулы булмаһын, ялҡаулыҡ өсөн дә урын табылыр..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2495/12